*Яҙмыштарға яҙылғаны...*
*Ул бит һинең үҙ ҡулыңда,*
*Һин бит батша үҙ юлыңда.*
*Рәшит ШӘКҮР.*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

26 МАРТ - 1 АПРЕЛЬ (БУРАНАЙ - АЛАҒАРАЙ) 2011 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№13 (431)



## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**"Шаяниум" шаян уйын ғынамы?**



**6** Юҡ, сәмде уятыусы, йөрәктәрҙе ҡуҙғытыусы сара ла...

**Башҡорт тигән ҡала булған һәм...**



ул хәҙерге Өфөгә нигеҙ һалған **7**

**Ни мәғәнә дөрөҫ һүҙ әйтеүҙән,**



**8-9** дөрөҫ һүҙең әгәр һуңлаһа?

**Фатихалы ғаилә усағы -**



**12** Ерҙәге ожмах сағылышы ул

**14** ТВ-программа


ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Ни өсөн уҡыусы гәзиттәрҙә тәнҡит мәҡәләләрен күберәк күрергә теләй?

*Миңһылыу АБДУЛЛИНА:* Һуңғы ваҡытта йәмғиәттә күҙәтелгән иң "һыҙланыулы" темалар тураһында һандар һәм факттар ғына биреү етмәй шул, ә ошо проблеманың психологик тәрәнлеген асып биргән аналитик мәҡәлә кәрәк. Ә аналитика, белеүемсә, барыбер ҙә кемдеңдер баҡсаһына таш ташлай. Хәҙерге уҡыусыларға бына ошондай аналитика аша бирелгән тәнҡит оҡшай, тип уйлайым.

Ә шулай ҙа беҙгә ниндәйҙер донъя, ил, төбәк кимәлендәге ваҡиғаларҙы, шәхестәрҙе, сәйәсмәндәрҙе тәнҡит утына тотоу мотлаҡ түгел. Иң тәүге сиратта, үҙебеҙҙең көнөлдә тәрбиәләргә, ҡылыҡтарыбыҙҙы, йәшәү рәүешебеҙҙе тәнҡит аша ла яйға һалырға кәрәклеген аңларға тейешбеҙ. Бына, мәҫәлән, үҙебеҙҙең балаларыбыҙға иғтибарҙы арттырайыҡ, уларҙың әхлағын да, уҡыуын да, үҙен нисек тотоуын да, кем менән дуҫлаша, кем менән ғаилә ҡора икәнен дә күҙ уңынан ысҡындырмайыҡ - ошо тәңгәлдә уңышҡа өлгәшкән йә уңышһыҙлыҡҡа тарыған ғаиләләр өлгөһө лә яҡтыртылһын матбуғат баҫмаларында, башҡаларға фәһем йә ғибрәт өсөн. Йәмғиәттең әхлаҡлы йә әхлаҡһыҙ булыуы - ҡатын-ҡыҙҙан, йәмғиәттең һаҡлаулы йә һаҡлауһыҙ булыуы ирҙәрҙән тора. "Ысын башҡорт ҡыҙы һәм ысын башҡорт егете ниндәй булырға тейеш?" тигән һорауға яуап биргән, башҡорт ҡанын уятырлыҡ һәм уйнатырлыҡ идеяларҙы яҡтыртҡан мәҡәләләр кәрәк. Бындай милләттәштең сәменә тейә, ғәмен уята торған тәнҡит һүҙе диалогтарҙа, түңәрәк ҡорҙарҙа бер нисә кеше менән тикшерелһә, тағы ла яҡшыраҡ. Халыҡ тарафынан яратып ҡабул ителер журналисты мин үҙенең генә түгел, ә бер-нисә кешенең уртаҡ фекерен халыҡҡа еткереүсе төҫмөрөндә күрәм. "Кәңәшле ил тарҡалмаҫ" тип, юҡҡа әйтмәгәндәр.

*Бәҙри ӘХМӘТОВ:* Психология ҡануны буйынса, кире мәғлүмәт ыңғайына ҡарағанда хәтерҙә тәрәнерәк эҙ ҡалдыра һәм оҙағыраҡ һаҡлана. Шуға күрә, күптәр өсөн матбуғат баҫмаларында яҡтыртылған негатив мәғлүмәт ыңғайына ҡарағанда ҡыҙыҡлыраҡ тойола. Һөҙөмтә булараҡ, күп кенә уҡыусылар журналистан тәнҡит мәҡәләләре талап итә, баҫмаға баһаны ла ана шул тәнҡит булыу-булмауына ҡарап бирә.

Тәнҡит мәҡәләһе тәнҡитләнеүсе баҡсаһына таш булып барып төшкәнгә күрә, уны барыһы ла өнәп бөтмәй. Тәнҡитте күтәрә белеү сифаты бик аҙҙарға хас. Уны баҫтырып сығарған матбуғат баҫмаһына ниндәйҙер кимәлдә баҫым яһалыуы тураһында ла әйтергә кәрәк. Бының тап киреһе була икән, тәнҡиттән арына барған гәзит-журналдарҙы халыҡ уҡымай башлай.

Ҡайһы бер матбуғат саралларында "ҡара пиар" өҫтөнлөк алды. Был төр мәғлүмәттең дә ҡайһы бер кешеләргә оҡшап ҡалыуы бар. Әммә ундағы "дөрөҫлөктөң" ысынында ялған булыуын аңлай башлаған кешеләр мәғәнәһеҙ быҫраҡ өйөүселәр телмәренән тиҙ биҙерәй. Журналист уйын уйнарға тейеш түгел. Уның мәҡәләһе урынлы, объектив һәм конструктив булырға тейеш. Матбуғат хеҙмәткәре өсөн кемдең дә булһа ниндәй ҙә булһа эш боҙоуы тураһында әйтеүе генә аҙ, ул: "Ни өсөн насар эш ҡылынды? Быға нисек юл ҡуйылды? Кем уны ваҡытында туҡтата ала ине? Уны бөгөн нисек төҙәтергә була?" - тигән һорауҙарға яуап бирә алырлыҡ һәләтлеккә эйә булырға тейеш.

Бер кеше лә тәнҡиттән һаҡлаулы булырға тейеш түгел. Ябай урам һепереүсеме йәки ил башлығымы - һәр кемгә ҡарата тәнҡит һүҙе әйтә алыу мөмкинлеге булыуы шулай уҡ төп шарттарҙың береһе. Юғиһә, журналистарҙан һөҙөмтәле эш өмөт итеүе ҡыйын.

**Илгиз ИШБУЛАТОВ**
**яҙып алды.**

ЙӘШЛЕК ЙӘШНӘҮҘӘРЕ

# ЭШ АРАҺЫНДА ЙҮГЕРЕҮ...

## спорт түгел инде



**Спорттың ниндәйҙер бер айырым төрөнә өҫтөнлөк бирмәй Лилиә: ул күп ярыштар чемпионы. Үҙе уҡыған БДПУ-ның география факультеты ҡыҙҙарының волейбол, лапта, баскетбол командалары капитаны, Өфөләге Баймаҡ яҡташтар ойошмаһының ҡыҙҙар волейбол командаһы капитаны, йәмәғәт эштәрендә әүҙем ҡатнашыусы Лилиә ӘМИНЕВА менән түбәндәге әңгәмәлә ҡунағыбыҙҙың уйкисерештәре, донъяға ҡараштары сағылыр, моғайын.**

### Спортҡа һөйөү ғаиләлә тәрбиәләнде

Атайым мәктәптә физкультура дәрестәренән уҡытҡанға күрә, спорт беҙҙең өйҙә һәр саҡ иғтибар үҙәгендә булды. Мин мәктәптәр араһындағы ярыштарға бик теләп йөрөнөм. Быға атайымдың дәртләндереүе лә сәбәпсе. Тренерҙарҙың бик һирәктәренә генә хас ораторлыҡ һәләтенә эйә ул. Бер хәл иҫтә: волейбол буйынса уҡыусылар араһында район ярышы бара. Атай әлегә килеп етмәгәйне, "Уйнай тороғоҙ", тип шылтыратты. Беҙҙең команда уйынды бик һүлпән алып бара. Уҡыусыларҙа ярыш сәмен ҡуҙғатып ебәрерлек дәртле һүҙ кәрәк, тип уйлап алдым да: "Әйҙәгеҙ, әүҙемерәк уйнайыҡ, еңеләбеҙ бит, юғиһә", - тинем. Командам һүҙҙәремде ишетһә лә, фәтеүә булманы - ҡаршы яҡ команда бер-бер артлы мәрәйҙәр йыя торҙо. Ниһәйәт, атайым күренеп, беҙгә бер ҡысҡырыуы булды, уйыныбыҙ көйләнде лә китте. Уның янда булыуы, ярышты ҡарап тороуы ғына ла көслө тәьҫир итә торғайны. Спортта ла илһам кәрәк бит. Атайым өйрәтмәһә, әсәйем ярыштарҙа ҡатнашыуыма риза булмаһа, спортҡа ылыҡмаған да булыр инем.

**(Дауамы 11-се биттә).**

*✓ Беҙ әле кешене закон да, власть та, йәмғиәт ойошмалары ла тейешле кимәлдә яҡлай алмаған ҡатмарлы заманда йәшәйбеҙ. Ә ҡан туғандарыңа, милләттәшеңә һәр саҡ таянып була.*



БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

# МОҢДАРҒА, ШИҒРИӘТКӘ...

## биш минут аҙыраҡ бит

**Оло шағирыбыҙ яңы ҡуян йылы менән беҙҙе ҡотлап: "Өркәклеге, ҡурҡаҡлығы ғына, кешеләргә йоға күрмәһен..." тип яҙһа ла, ҡуяндың ҡурҡаҡлығы миңә йоғоуын һиҙәм. Былай ҙа йыуаш холоҡло кешемен. Хатта телефон аша берәй танышым менән һөйләшһәм: "Һинең телефоның йәшерен тыңлау ойошмаһына тоташтырылмағанмы?" - тип һорағы килә лә тора.**

Был ҡурҡыу хисе ҡуйы томан һымаҡ миңә генә түгел, ә бөтөн ил өҫтөнә төшкәндәй тойола. Элек, В.Высоцкий йырлағанса, "Мы впереди планеты всей" инек, әле артта ҡалған төбәк булыуыбыҙ асыҡланды. Телевизорҙан да, радионан да, илдә милләтселек, экстремислыҡ һәм енәйәтселек көслө, тип тылҡыйҙар. Беҙҙә бөтәһе лә хөрт, тигән негативты тыңлағандан һуң нисек ҡурҡмайһың инде! Шуға ла телевизорҙан "Яңылыҡтар" кеүек тапшырыуҙарҙы ҡарамаҫҡа булдым әле.

Хәйер, телевизорҙы бик йыш ҡабыҙмаһам да, программаһын уҡып сығам. Бер шәмбе көнө программала "Халыҡ моңдары" тигән тапшырыу буласағын күреп, шатланып, көнө буйы күтәренке кәйеф менән көтөп йөрөнөм. Тик ул "Халыҡ моңдары" биш минутҡа ғына һыйҙы. Бала саҡта беҙҙе "Родина" кино йортона алып барҙылар. Беҙ "Карнавальная ночь" киноһын ҡарап, хисләнеп ҡайттыҡ. Күп балалар актриса Л. Гурченко йырлаған йырҙы отоп алып, "Пять минут, пять минут..." тип йырлап та йөрөнө. Күрәбеҙ, һәр саҡ шаян Әлфиәнең йөҙө үҙгәреп киткән. Ул ҡулына ҡағыҙ, ҡәләм тотоп, бик етди төҫ менән тегендә, бында йөрөй. Нимәлер яҙа, һыҙа. Уға нимә булғанын аңламай аптырайбыҙ. Бына кис етте. Йоҡларға яттыҡ. Әнүзә арып йоҡоға талған Әлфиәнең мендәр аҫтынан теге серле ҡағыҙҙы һаҡ ҡына тартып сығарҙы. Уҡыһаҡ, унда: "Биш минут, биш минут - биш минут та биш секунд", - тип яҙылғайны. Йыр тәржемәһе шул һүҙҙәрҙән ары үтә алмаған. Һыҙғыланған юлдар бик күп. Беҙ шым ғына көлөшөп, ҡағыҙҙы урынына һалдыҡ. Китапханаға йөрөгәндә Әлфиә юҡҡа ғына шағирҙар тураһындағы китаптар һорап алып уҡымаған икән, тип аңланым, хатта тәржемәсе шауҡымы ла уны урап үтмәгән. Шәмбе көнө биш минутлыҡ "Халыҡ моңдары"н тыңлап, шул ваҡиға иҫкә төштө. "Әлфиә дөрөҫ яҙған икән, бына һиңә "Биш минут, биш минут та биш секунд", тип әрнеп әйтеп ҡуйҙым. Рәүеф Бикташев "Ишара" рубрикаһында яҙғанса: "Берҙәм, татыу булайыҡ, әммә татыулыҡ бер башҡорт иҫәбенә генә булмаһын..." Моңдарға, шиғриәткә биш минут ҡына ҡалһа, рух һулыр бит, тип тә өҫтәге килә...

**Фәүзиә ЯХИНА.**

МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ

**Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре араһында "Айыуға барһаң, ағаң менән бар" тигәне мәғәнәһе буйынса "Ҡырғы менән ҡолан аулама" (мәғәнәһе "Сит кеше менән ҡырағай дала аты аулама") тигәндең синонимы булараҡ ҡына аңлашылған һымаҡ. Әммә уларҙың тағы ла төпкәрәк йәшерелгән мәғәнәһе лә бар.**

# АЙЫУҒА БАРҺАҢ,

## ағаң менән бар...

Тәжрибәле һунарсылар иң ҡурҡынысы - айыуға һунар икәнен нарыҡлар. Үҫмер сағында Салауат батыр ҙа айыу үлтереп дан алған. Ниңәлер, мәҫәлән, бүре һуғып алыу ундай уҡ батырлыҡҡа иҫәпләнмәгән. Айыуҙың тиреһе ҡалын, бер атҡандан, бер сәнскәндән генә йән бирә торған йыртҡыс түгел ул. Ғәҙәттә, айыуҙы ҡыш йә иртә яҙҙан өңөндә йоҡлап ятҡан саҡта төтөн һалып йә гөжгөп сығаралар. Айыу тәүҙә үкерә, үҙенең йоҡоһон мәлһеҙ бүлеүселәрҙе өҙгөләрҙәй булып килеп сыға ла, күҙенә аҡ-ҡара күрмәй, иң яҡын тороусыға ташлана. Йыш ҡына бындай осраҡта мылтыҡтан залп бирелә, суҡмарҙар эшкә егелә һәм күп осраҡта ҡанһыраған яралы айыу һунарсыларҙы өҙгөләп ташлаусан.

Иң ҡурҡынысы - яраланған айыу, ти һунарсылар. Уны бер атҡанда, бер һуҡҡанда үлтермәһәң, бәләне көт тә тор. Бик күп һунар мажаралары шул хаҡта ла бәйән итә: күп осраҡта яралы айыу иң яҡын торған һунарсыға ташланғандан һуң башҡалар ҡото алынып ҡасып китеүсән. Бына ошо осраҡта инде бергә һунарға барған кешеңдең яҡын туғаның булыуы фарыз. Ҡан туғанын айыуға ем итеп кем биреп китһен инде? Ундай саҡта хатта иң ҡурҡаҡ кеше лә батырға әүерелә. Йән тартмаһа ла, ҡан тарта. Айыуға һунарға ағаң менән барыуҙың мәғәнәһе тап ошонда ла инде.

Әйтемдең икенсе бер мәғәнәһе: милләтебеҙҙең ҡан туғанлығы менән көслө булыуында. "Ят ярлыҡамай, үҙеңдеке үлтермәй" әйтеме лә өҫтә килтерелгән ике әйтемдең синонимы, мәғәнәүи дауам ителеше. Элек-электән зат институты башҡорт йәмғиәтенең нигеҙен тәшкил иткән, барыһы ла нәҫел, зат башында торған аҡһаҡалға буйһонған, уның һәр һүҙе кисектергеһеҙ үтәлгән, олоно ололоҡлау, кесегә кесе итеп ҡарай белеү ҙә, затҡа ҡараған ғаиләләрҙәге эске тәртип тә ошо ҡоролош ярҙамында бойомға ашырылған. Беҙ әле кешене закон да, власть та, йәмғиәт ойошмалары ла тейешле кимәлдә яҡлай алмаған ҡатмарлы заманда йәшәйбеҙ. Ә ҡан туғандарыңа, милләттәшеңә һәр саҡ таянып була. Улар һине ярлыҡамаған хәлдә лә, барыбер үлтермәйәсәк. Милли идеяға торош был әйтемдәр.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

ИҒТИБАР!



Туймазы районының башҡорт теле уҡытыусылары.

# КЕМ АЛЫҠ?

**Хәбәр ителеүенсә, мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ март аҙағына тиклем 2011 йылдың тәүге ярты йыллығы хаҡтары менән 2011 йылдың икенсе ярты йыллығына гәзитебеҙгә яҙыла ала.**

Март айында 2011 йылдың икенсе ярты йыллығына "Киске Өфө"гә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан берәү **микротулҡынлы мейес** отасаҡ. Уйын апрелдә лә дауам итер һәм, моғайын, ҡатнашыусыларҙы дәртләндерер тағы берәй бүләк тәҡдим ителер, тигән өмөттә ҡалабыҙ.

**Шулай итеп, микротулҡынлы мейесте кем алыҡ? Беҙҙең индекстар:**

**50665 - алты айға 330 һум 24 тин, 50673 (предприятие һәм ойошмалар өсөн) - 360 һум 24 тин.**

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә кәңәш ҡорайыҡ, бергә уйлайыҡ, бергә һығымталар яһайыҡ!**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Рәсәй Федерацияһы Федераль Йыйылышының Дәүләт Думаһында Башҡортостан Республикаһы көндәре булып үтте. Республика экспозицияһын асыу тантанаһында Дәүләт Думаһы рәйесе Борис Грызлов, Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов сығыш яһаны. Сара сиктәрендә Рәсәй парламентында төбәктең социаль-иҡтисади ҡеүәтен һәм инвестицион күркәмлеген сағылдырған күргәҙмә экспозицияһы эшләне. Шулай уҡ беҙҙең рәсми делегация Дәүләт Думаһы депутаттары менән осрашты. Дәүләт Думаһына Мәскәүҙә уҡыған студенттар ҙа килде һәм Башҡортостан Президенты менән осрашты.

✓ Мәскәүҙә Рәсәй Президенты ҡарамағындағы Башҡортостан Тулы хоҡуҡлы Вәкиллеге бинаһында Мәскәү вуздарында уҡыусы студенттар өсөн студент үҙәге ойоштороласаҡ. Был хаҡта Дәүләт Думаһында Башҡортостан көндәрен үткәргән саҡта БР Президенты Рөстәм Хәмитов белдерҙе.

✓ Башҡортостанға Палестина милли хакимиәте башлығы Мәхмүд Аббас килде. Рәсәйгә эш сәфәре барышында Палестина башлығы ике көн дауамында Башҡортостан Республикаһы менән танышты. Ул тәүге көндә Рәсәй мосолмандарының Үҙәк диниә назараты рәйесе, юғары мөфтөй Тәлғәт Тажетдин менән осрашты, Конгресс-холда Башҡортостандың сәнғәт оҫталары концертын ҡараны. Икенсе көндә Мәхмүд Аббас Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов менән осрашты, Өфө нефть техник университеты студенттары алдында лекция менән сығыш яһаны.

✓ Мәсетле муниципаль район Советы ултырышында конкурс һөҙөмтәләре буйынса Мәсетле район хакимиәте башлығы вазифаһына контракт буйынса Могильников Иван Петрович тәғәйенләнде.

✓ Хәйбулла район Советы ултырышында конкурс һөҙөмтәләре буйынса Хәйбулла район хакимиәте башлығы вазифаһына контракт буйынса Хәйруллин Рөстәм Рәүҙәт улы тәғәйенләнде.

✓ БР Хөкүмәте комиссияһы ултырышы юл хәүефһеҙлеге мәсьәләләренә арналды. Уны БР Президенты Рөстәм Хәмитов алып барҙы. Билдәләнеүенсә, һуңғы биш йылда республикала транспорт һаны 240 меңгә күбәйгән. Ошо ваҡыт эсендә 300 мең кеше транспорт менән идара итеү хоҡуғына эйә булған. Биш йыл эсендә 27 мең юл-транспорт фажиғәһе теркәлгән.

ПРЕЗИДЕНТ БЛОГЫНАН




**"Үкенескә күрә, Өфө авария күп булған ҡалалар рәтенә инә. Ошо күҙлектән ҡарағанда, башҡа ҡалаларыбыҙҙа ла хәл-торош яҡшынан түгел. Трассаларҙа күп кеше үлә. 2010 йылда юлдарҙа 658 кеше үлгән (5563 кеше йәрәхәт алған). Ә халҡы 9,5 миллион булған Швецияла 300 кеше үлгән. Беҙҙә, халыҡ һанынан сығып ҡарағанда, юлдарҙа үлеү осрағы Швеция менән сағыштырғанда 4 тапҡырға юғарыраҡ. Уларҙа юлдарҙа үлем кимәлен нулгә төшөрөү концепцияһы ҡабул ителгән, беҙҙә ундай программа юҡ. Хәүефһеҙлек күп факторҙарға бәйле. Шул иҫәптән юлдарҙың торошона. Быйыл юлдар һалыуға һәм уларҙы ремонтлауға республика бюджетынан 8 миллиард һум йүнәлтеләсәк. Аҡсаның маҡсатлы тотонолоуын күҙәтеүгә аласаҡбыҙ", - тип, Башҡортостан Президенты үҙ блогында иғтибарҙы сираттағы проблемаға - юлдар торошона йүнәлтте. Ысынлап та, был тема күптәрҙең үҙәгенә үткән инде. Уны хәл итеү өсөн ниндәй саралар күрергә мөмкин? Быны блоггерҙарҙың фекеренә ҡолаҡ һалып асыҡлап ҡарайыҡ.**

# ҮҘӘКТӘРГӘ ҮТӘ ЛӘ ШУЛ

## юлдарҙағы соҡор-саҡыр

**Fedorovn.** Юлдар төҙөүгә аҡса бүленә икән, уларҙың маҡсатлы файҙаланылыуын ғына түгел, юлдарҙың нимәнән эшләнгәнен дә контролләргә кәрәк. Асфальттың һәм юл һалыуҙың бик күп заманса төрҙәре бар, улар беҙҙең ҡыштарға ла сыҙар, ауыр йөк машиналары йөрөһә лә, бер нисә тиҫтә йыл хеҙмәт итер ине. Әйтәһе лә түгел, совет заманында һалынған юлдар бөгөнгөләре менән сағыштырғанда күпкә яҡшыраҡ, был бигерәк тә районларҙа күҙгә ташлана. Әммә сифатлы технологиялар менән юл һалыу юлсыларға файҙалы түгел. Миллиардлап аҡса бүлдереп өйрәнгәндәр, ә улар ҡайҙа китә - билдәһеҙ.

**zii57.** Юлдарҙа, урамдарҙа, ҡала сите юлдарында юл хәрәкәте ҡағиҙәһен боҙоу осраҡтарын теркәүсе автоматик система ҡуйырға кәрәк. Шулай итеп күптәрҙе ҡағиҙәләрҙе үтәргә мәжбүр итеп булыр. Ә водителдәр билдәле бер урынға өйрәнмәһен өсөн, унда камера тора, күсереп йөрөтөп булған система кәрәк. Бөгөн бер урында, иртәгә - икенсе. Тағы - республикаға барлыҡ юлдарҙы тикшереп, хәл-вәҡиғаларҙы баһалау, кәрәк саҡта водителдәргә ярҙам итеү өсөн бөрөү булһа ла ЮХХДИ вертолеты кәрәк. Ул да видеотеркәү системаһы менән йыһазландырылған булырға тейеш.

**mamalimov.** Ҡайһы бер юл саттарында ни бары светофорҙарҙың эшен тейешле тәртиптә йайлап ҡына ебәрергә кәрәк: ҡайҙалыр уҡ өҫтәргә, ҡайҙалыр үткәреү ваҡытын оҙайтырға. Юл саттарында тығындар барлыҡҡа килмәһен өсөн светофорҙарҙы берейһендә ҡыҙыл, икенсеһендә бер нисә секундтан йәшел янғас, кешеләргә манев эшләп өлгөрөр өсөн ваҡыт бирергә кәрәк. Юҡһа, бер яҡтан йәшел янып та өлгөрмәй, икенсе яҡтан ҡыҙыл яна башлай, юл сатында шунда уҡ тығын барлыҡҡа килә.

**ravil1958.** Юлдар ҙа, уларҙағы тәртип тә, хатта бөгөн иң күп проблемалы торлаҡ-коммуналь хужалыҡтар ҙа - беҙҙең менталитет, беҙҙең тәрбиә проблемаһы. Тимәк, ғаиләлә, балалар баҡсаһында, мәктәптә тәрбиәгә күберәк иғтибар бирергә кәрәк.

**aygiz74.** Светофорҙар өсөн ҡулса саттары яҡшыраҡ. Кем сит илдә булған, улар унда беҙҙәгегә ҡарағанда йөрөү күпкә күңеллерәк булыуын белә. Сөнки уларҙа асфальт составы яҡшыраҡ (таш ҡатыш) һәм улар ҡояшҡа ирел ятмай. Икенсенән, тамғалар, һыҙаттар беҙҙәге кеүек буялмай, уларҙы гипс менән йәбештерәләр. Махсус гипс асфальтҡа ныҡ йәбешә һәм хатта эңерҙә лә, төндә лә яҡшы сағыла. Юл йөрөүсегә лә күңелле, юл бөлдөрәнә, бороложтарына тиклем күренеп ята, билдәләр ҙә әллә ҡайҙан күренә. Беҙҙә бороложтарҙа ҡуйылған ҡайһы бер билдәләр алыҫтан күренмәй.

**oleg_ribak.** Бер нисә йыл элек Карелияға барҙыҡ. Бында финдар юл һалған, юл түгел, үҙе бер матурлыҡ. Трассала ҡыҙыҡ тамғаға тап булдыҡ. Ҡыҫҡаса, юл үҙе өс һыҙатлы, тәүҙә һинең өсөн ике һыҙат, ә ҡаршы яҡтыҡы - берәү. Ике саҡырым үткәс, киреһенсә. Бер ниндәй фураны уҙып китеү ҙә юҡ, сөнки белеп тораһың, ике саҡырымдан һуң һине ике һыҙат көтә һәм унда рәхәтләнеп уҙып китә алаһың. Һөҙөмтәлә авариялар һаны ике тапҡырға кәмегән.

**Sultanmehmet.** Төркиәлә Истамбулда шоссеның мегаполис аша үткән бүленгән һыҙаттары буйлап Metrobus системаһындағы автопоезд йөрөй. Миңә оҡшаны. Был системаны Өфөлә индереүҙең ҡеүәте ҙур. Бындай линия трамвай линиялары буйлап үтә алыр ине. Бер нәмәне лә һүтергә, емерергә кәрәкмәй. Бары тик линияны уртанан үткәрергә, туктау платформалары эшләргә генә кәрәк. Бында йәйәүлеләр өсөн күперҙәргә сығым кәрәк буласаҡ, әлбиттә. Юл саттарында бүленгән һыҙатты автоматик шлагбаумдар ярҙамында тиҙлек яратыусыларҙан айырырға кәрәк.

**ilmir102rus.** Минеңсә, юлдарҙың насар ҡатламы, һис һүҙһеҙ, юл-транспорт ваҡиғалары сәбәптәренең береһе. Беҙгә яңы асфальт кәрәк! Беҙҙең асфальтты сифаты буйынса хатта Европаның иң бәләкәй ауылдарында ла һалмайҙар. Һәм уны Германиялағы кеүек төндә һалырға кәрәк - фаралар яҡтыһында тигеҙ булмаған урындар яҡшы күренә. Юл-транспорт ваҡиғаларының икенсе мөһим факторы - беҙ үҙебеҙ. Транспорт менән идара итеү мәҙәниәте, ғөмүмән, мәҙәниәт юҡ. Ни өсөн шулайҙыр, белмәйем. Моғайын, көнкүрешебеҙ, балаларыбыҙҙың, туғандарыбыҙҙың тормошо юлға һалынмағанға шулайҙыр. Швецияла халыҡ тыныс, шат, ҡәнәғәт, был бөтөн нәмәгә, шул иҫәптән юл мәҙәнилегендә лә сағыла.

**aidar_t.** 1. Сифатлы юл төҙөү өсөн техника һәм технологиялар ғына түгел, квалификациялы кадрҙар ҙа кәрәк.

2. ЮХХДИ хеҙмәткәрҙәре юлда водителдәргә ярҙам итергә тейеш, ә аҡса йыйырға түгел.

3. Юлдарҙа үҙендә тотоу мәҙәниәтен дәртләндерергә кәрәк. Шул уҡ ваҡытта һәр водитель юл ҡағиҙәһен боҙған өсөн яза алырын белергә тейеш.

4. Автомәктәптәрҙә беренсе ярҙам күрһәтеү ҡағиҙәләренә күберәк ваҡыт бүлергә кәрәк. Юл-транспорт ваҡиғаларынан һуң күптәр ваҡытында һәм тейешле ярҙам күрһәтелмәүе арҡаһында үлә.

5. Эскән водителдәр менән көрәште көсәйтергә.

**ildar_peshehod.** Эште коррупцияны ауыҙлыҡлауҙан башларға кәрәк. Бары тик юлдар һалыуға һәм уларҙы ремонтлауға бүленгән аҡсаны ҡаты контролләү генә юл өҫтөн тәртиптә тоторға ярҙам итәсәк. Юлсылар асфальтҡа өҫтәмә бүленгән ресурстарҙы кеҫәләренә йәки дачаларына һала, тендер оторға ярҙам иткән чиновниктарға бүлә, насар климат һәм грунттың икелөтә ултырыуы тураһында әкиәттәр уйлап таба икән, юлдарыбыҙ бер ваҡытта ла яҡшы булмаясаҡ. Бөтөн нәмә коррупцияға барып терәлә. Ә юлдарҙа тигеҙ асфальт булһа, водителдәрҙе машинаның аҫ яғы бәрелеүе, ҡыйыш юл билдәләре, йәшел майкалы талаусылар асыуын ҡабартмаһа, халыҡ күҙгә күренеп изгерәк була башлаясаҡ, ул ваҡытта инде артабанғы мәҙәниәт хаҡында уйларға мөмкин.

**ilnur80.** Бәлки, йыл һайын бер үк соҡорҙарҙы ямағансы, бер тапҡыр яҡшы итеп ремонт эшләргә кәрәктер? Юлдар ремонтлағанда урланған аҡса тураһында бер тапҡыр ғына уҡыманым һәм сюжеттар ҡараманым. Унда күпме материал ҡулланылғанын, асфальт әҙерләүҙә һәм һалыуҙа технология һаҡланғанмы икәнлеген тикшереү мөмкин түгел бит.

**Fedviktor.** Бына беҙҙең юлдар тураһында ҙур булмаған материал: "Рәсәй юлдарының именлеге өсөн" төбәк-ара йәмәғәт ойошмаһы Рәсәй автоюлдарының сираттағы рейтингын баҫтырып сығарҙы. Ул халыҡ иҫәбе, автопарктар, юлдарҙың оҙонлоғо, юл-транспорт ваҡиғаларының зыян күреүселәр һанын иҫәпкә алып билдәләнә. Былтыр иң имен юлдар Төмән өлкәһендә булған. Унда хәүефһеҙлек индексы 8,23 тәшкил итә. Шулай уҡ Новосибирск, Воронеж, Омск, Липецк, Рязандә хәл-торош яҡшы, уларҙа хәүефһеҙлек индексы 25 пункттан үтмәй. Мәскәү 12-се урында. Иң ауыр хәл-торош Екатеринбургта, Силәбелә, Өфөлә. Өфөлә авария индексы 117,5 пункт тәшкил итә. Сәбәбе - юлдарҙың насар булыуы".

**tuimazy_1.** Мәғлүм булыуынса, юлдың сифаты тәү сиратта асфальт аҫтына түшәлгән материал менән билдәләнә. Был сифатты күтәреүгә грунт менән асфальт, дренаж, арматуралау араһында айырыусы ҡатлам итеп файҙаланылған геотуҡыма материалдар ҡулланыу мөмкинлек бирәсәк. Бындай продукцияны Туймазы туҡылмаған материалдар фабрикаһы етештерә. Геотуҡыма материалдар ҡулланып һалынған юлдар бер нисә өҫтөнлөккә эйә: ремонт үткәреү ваҡытын, тәбиғи материал сығымын ҡыҫҡарта; объекттарҙың хеҙмәт, ҡулланыу ваҡытын оҙайта. Был материалдар Туймазы - Бәләбәй юлын ремонтлағанда тәжрибә рәүешендә ҡулланылды. Һынау шуны күрһәтте: асфальт-бетон ҡатламының эксплуатация ваҡыты оҙайҙы, юл өҫтөндә температура тәьҫире эҙемтәләре һуңыраҡ барлыҡҡа килде. Фабриканың продукцияһы Рәсәйҙең күп ҡалаларына ебәрелә: Мәскәүгә, Калининградҡа, Санкт-Петербургҡа, Ульяновскиға, Тверьгә, Татарстан Республикаһына, Сочиға, Ямал-Ненец Автономиялы Округына, шулай уҡ Ҡаҙағстанға, Германияға. Ә республикала үҙебеҙҙә етештерелгән продукцияның дөйөм күләменең ни бары 20 процентына ғына һорау бар.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Рәсәйҙә ике проблема бар, тиҙәр. Юлдар һәм алйоттар. Был әйтем нисә быуат йәшәгәндер - билдәһеҙ, әммә ошоғаса берәү ҙә уның сәбәптәрен аңларға, ни өсөн уларҙың барлығын асыҡларға, төбөнә төшөп өйрәнергә теләмәгән. Рәхәт бит, һыныҡҡа һылтау итәһең дә ҡуяһың... Бөгөнгө фекер алышыу беҙҙең аңға бербереһенә тығыҙ бәйләнеп инеп оялаған проблеманы ниндәйҙер кимәлдә асыҡланы кеүек. Бәлки, тулыһынса хәл итергә лә оҙаҡ ҡалмағандыр.**

**Шәрифә САЛАУАТОВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Был аҙнала Өфөлә "Рәсәй һәм ислам донъяһы: үҙ-ара цивилизациялы бәйләнеш тарихы һәм перспективаһы" халыҡ-ара конференцияһы уҙҙы.

✓Башҡортостан Хөкүмәтенең 2011-2015 йылдарға "Башҡортостан Республикаһының торлаҡ пункттарын тышҡы яҡтыртыу системаларын модернизациялау" республика маҡсатлы программаһын раҫлаған ҡарарына ҡул ҡуйылды. Программа урамдарҙы яҡтыртыуҙы инвентаризациялауҙы, терәктәр һәм линияларҙы ремонтлауҙы, иҫкергән яҡтыртҡыстарҙы алмаштырыуҙы күҙҙә тота. Артабан энергияны һөҙөмтәле файҙаланыусы заманса технологиялар һәм материалдар ҡулланып, урамдарҙы яҡтыртыу буйынса яңы системалар төҙөү күҙаллана.

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов белдереүенсә, Сәғүд Ғәрәбстаны республиканың ауыл хужалығына инвестициялар һалмаҡсы. Ошо хаҡта һөйләшеп килешеү өсөн яҡын көндәрҙә был илдән ҙур делегация Башҡортостанға киләсәк. Ғәрәп донъяһында хәҙер аҙыҡ-түлек мәсьәләһе бик киҫкен тора, шуға ла уларҙың тап ауыл хужалығы һәм хәләл аҙыҡ етештерә алған төбәк менән ҡыҙыҡһыныуы аңлашыла. Бынан тыш, ғәрәптәрҙе нефть химияһы өлкәһендә хеҙмәттәшлек һәм Башҡортостан шифаханаларында ял итеү ҙә ҡыҙыҡһындыра.

✓Халыҡ-ара театр көнө алдынан журналистар иң яҡшы театр эштәрен билдәләне. Уның буйынса "Иң яҡшы ҡатын-ҡыҙ роле" номинацияһында енеүсе итеп Башҡорт дәүләт академия драма театры артисы Эльвира Юнысова, "Иң яҡшы ир-егет роле" номинацияһында "Нур" театры артисы Альберт Шәрәфетдинов танылды. "Икенсе пландағы иң яҡшы ҡатын-ҡыҙ роле" номинацияһында Милли йәштәр театры артисы Рушана Бабич, "Икенсе пландағы иң яҡшы ир-егет роле" номинацияһында Башҡорт дәүләт академия драма театры артисы Алмас Әмиров енеп сыҡты.

✓Башҡортостан территорияһында оҙаҡламай Санкт-Петербург менән Ҡытайҙы тоташтырыусы магистраль төҙөлә башлаясаҡ. Был юлдың Татарстан аша үткән участкаһы төҙөлөп бөтөү өҫтөндә.

*✓ Ауылда эсеү һирәк күренешкә әйләнеп, бара торғас, бөтөнләй бөттө. Шулай эскелеккә ҡаршы дүрт йыл алып барған көрәшебеҙ матур һөҙөмтә бирҙе: инде беҙ, ауыҙ тултырып, Көсәпәйҙә эсмәйҙәр, тип әйтә алабыҙ.*



ҠУЛЛАНЫУСЫ ӘЛИФБАҺЫ

# ХАҠЫ АРТҠАС НИ...
## сифаты ла булһын ине

**Магазин һәм баҙар кәштәләрендә хаҡтар күтәрелеүен һәр кем шәйләйҙер. Мәҫәлән, барлыҡ аҙыҡ-түлек араһында хаҡ артыу буйынса рекорд ҡуйған ҡарабойҙай ярмаһын алайыҡ. Бер йыл элек кенә социаль аҙыҡ-түлек исемлегендә булған был ярманың килограмы 30 һумдан артмаһа, бөгөн иһә был хаҡ 130 һумдан артып китте.**

Икмәктең уртаса хаҡы 18-31 һум. Әгәр ҙә игенгә хаҡ арта ҡалһа, икмәк продукцияларына ла хаҡ ҡырҡа күтәрелеүе мөмкин, тип иҫкәртеп тора етештереүселәр. Тимәк, хаҡ арттырыуға нигеҙ әҙерләнә. Өфө магазиндарында һөттөң бер литрын 20 һумға һатып алырға мөмкин булһа, ҡаланың төрлө урындарында иртә тандан мискәләрҙә килтереп һатылған һөттөң литры 12-15 һум тирәһе. Ит етештереүҙең бик күп факторҙарға бәйле булыуын иҫәпкә алып, белгестәр был өлкәлә ҡырҡа ғына прогноздар бирергә ашыҡмай. Бөгөнгө көндә Өфөлә иттең бер килограммы 180-280 һумға һатыла. Яҙ айҙарында шәкәргә әллә ни артмаҫ, тиҙәр. Ә көҙгә уның хаҡы 2009 йыл хаҡтарына тап килер, тип күҙаллай белгестәр. Шәкәрҙе бөгөн магазин кәштәләрендә 35-40 һумға табырға мөмкин.

Һуңғы айҙарҙа картуф һәм йәшелсәгә хаҡтың ике тапҡырға артыуы күҙәтелеп, уның килоһы уртаса 35-55 һумғаса етте. Бөгөн был төр продукцияға хаҡтар ниндәйҙер кимәлдә тотороҡло булһа ла, ти эксперттар, был тенденция оҙаҡҡа түгел һәм май айына картуф һәм йәшелсәгә хаҡтарҙың тағы ла күтәрелеүе көтөлә. Ғөмүмән, үҙебеҙҙә картуф һәм йәшелсә-емештең запасы әҙ, ә Европа илдәрендә был продукцияларға хаҡтарҙың юғары булыуын иҫәпкә алып, айына хаҡ уртаса 10-15 процентҡа артыуы ихтимал.

Емеш-еләккә, айырыуса алма һәм грушаға, хаҡтар иң юғары нөктәһенә етеп, бөгөнгө көнгә һатып алыуға һорауҙы ҡырҡа кәметкән. Оҙаҡламай яңы уңыштар буласағын иҫәпкә алғанда, емеш-еләк хаҡтарын артабан арттырыу ахмаҡлыҡ булыр ине, тип белдерә эксперттар. Бөгөнгө көндә алма, груша хаҡтары 55-120 һумғаса.

Ҡыш айҙарында хаҡтарҙың ҡапыл һәм күпкә күтәрелеүе һатып алыусыларҙың икенсе төр аҙыҡ-түлеккә күпләп күсеүенә килтерҙе, тип билдәләй эксперттар. Элек юғары һорау менән файҙаланмаған борсаҡ, кукуруз һәм арпа ярмаһына быйыл һорау 5 тапҡырға артҡан.

Аҙыҡ-түлеккә хаҡтарҙың артыуы барлыҡ илдәрҙә лә күҙәтелә, ти белгестәр. Беҙҙең илдә хаҡтарҙың артыуын былтырғы ҡоролоҡ, янғындар менән бәйләйҙәр. Хаҡтарҙың бер аҙ тотороҡланыуын быйылғы йыл уңышы ниндәй булыуына ҡарап көтөргә була. Шуны билдәләп үтергә кәрәк: аҙыҡ-түлеккә хаҡтарҙың артыуы бәкәлгә һуҡһа ла, тикшереүҙәр күрһәтеүенсә, Өфө ҡалаһы ҡулланыусылары башҡа төбәк һатып алыусылары менән сағыштырғанда аҙыҡ-түлек сифаты менән күпкә ҡәнәғәт.

**Сәлимә АРЫҪЛАНОВА әҙерләне.**

"АЙЫҠ АУЫЛ" КОНКУРСЫ

**"Айыҡ Башҡортостан" төбәк ижтимағи хәрәкәте иғлан иткән республика конкурсында ҡатнашырға теләк белдереп ғариза ебәреүселәр һаны артҡандан арта. Баҡтиһәң, Башҡортостаныбыҙҙа "йәшел йылан" һаҙлығына бата барыуҙарын аңлап, ауылдаштарын, туғандарын, балаларын айыҡ йәшәү рәүешенә ылыҡтырырға тырышыусы әҙәм кешеләр һәр урында бар икән. Бөгөн Салауат районының конкурста ҡатнашырға ғариза биреүсе ике ауылы менән таныштырмаҡсыбыҙ.**

# МАТУР ДАНДЫ...
## айыҡ кешеләр яулай

### Көсәпәй ауылы

Элегерәк "Насар гәҙәт йоғошло", тиһәләр, заманса вариантында ул "Яҡшы гәҙәт йоғошло", тиеберәк яңғырар ине. Сөнки тап Көсәпәй ауылы Әбйәлил районының айыҡтар йәшәгән Ишкилде ауылына эйәреп, районда беренселәрҙән булып үҙен айыҡ ауыл тип иғлан итә. Башланғысты район етәкселеге лә хуплай, сыбарҡүлдәр күтәреп ала.

Көсәпәйҙәр ҙә ишкилделәр кеүек айыҡ тормошҡа тәүге аҙымды магазинда спиртлы эсемлектәрҙе һатыуҙы тыйыуҙан башлай. Эскеселәргә йәшәү ауырлаша, улар "йәшел йылан" эҙләп, Йүрүҙән аша күрше ауылдарға сығып китергә мәжбүр була. "Ә ул ауылдарҙың эскеселәре, гәҙәттә, магазин алдында ситтәрҙе һағалай. Шуға кеше шешә артынан барырҙан алда, унан нисек ҡайтырын уйлай, - ти үҙенең бер интервьюһында ауыл советы депутаты Ирек Ғарипов. - Милиция менән бәйләнеште нығыттыҡ. Сәмәй ҡыуыусыларҙы фашлап, уларҙы бындай шөғөлдәренән туктаттыҡ. Тора-бара күмәк эште боҙоп ҡуйырынан, тәнҡиттән ҡурҡып, кеше эсеүҙән тыйылды, ҡайҙандыр алып ҡайтҡан араҡыһын өйөндә эскән хәлдә лә, иҫерек көйө урамда күренмәне. Эскелек менән көрәшеүебеҙҙе ситтә лә ишеттеләр, матур даныбыҙ таралыу ауылдаштарға дәрт өҫтәне, инде яулаған абруйыбыҙҙы төшөрмәүҙә һәр кем үҙен яуаплы тойҙо. Ауылда эсеү һирәк күренешкә әйләнеп, бара торғас, бөтөнләй бөттө. Шулай эскелеккә ҡаршы дүрт йыл алып барған көрәшебеҙ матур һөҙөмтә бирҙе: инде беҙ, ауыҙ тултырып, Көсәпәйҙә эсмәйҙәр, тип әйтә алабыҙ".

Ауылда бөгөн 69 йортта 249 кеше йәшәй. 17 ғаилә - күп балалы. Ауылда 21 трактор, 16 еңел машина, ике таҡта ярыу цехы, ике шәхси магазин бар. Эшлекле, йәш ғаиләләрҙең күп булыуы һоҡландыра. Эшҡыуарлыҡ менән күптән шөғөлләнгән Динә менән Ураз Яппаровтар ауыл халҡынан артып ҡалған һөтөн йыя, үҙҙәренең магазиндары бар, эре малдары ла тиҫтәнән артыҡ. Зөһрә менән Илгиз Мөхәмәҙиевтарҙың да үҙ магазины

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# МӨҒЖИЗӘ ЭҘЛӘЙБЕҘ!

**Өфө ҡалаһының Совет районы хакимиәте райондың ете мөғжизәһен асыҡлау буйынса акция иғлан иткәйне. Уның маҡсаты - территорияның йөҙөн билдәләп, визит карточкаһы булырҙай үҙенсәлекле, ҡабатланмаҫ архитектура, тәбиғәт, мәҙәниәт һәм башҡа объекттарҙы асыҡлау.**

Конкурс ике этапта уҙғарыла. Тәүгеһендә иң күп тауыш йыйған 10 объект икенсе этапҡа үтә. Икенсе этапта инде ете финалсы һайлап алына.

Конкурста ҡатнашыу өсөн ғаризалар коллективтарҙан, предприятиеларҙан, учреждениеларҙан, ижади һәм йәмәғәт ойошмаларынан, үҫмерҙәрҙе һәм балаларҙы ла индереп, район халҡынан: Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 111, 202 бүлмә адресы буйынса ҡабул ителә.

Йомғаҡлау тантанаһы Ҡала көнөндә үтәсәк һәм еңеүселәргә ҡиммәтле бүләктәр тапшырыласаҡ. Акцияның финалға сығыусыларын дәрәҫ атаусыларға айырым бүләктәр ҡаралған. Акция буйынса райондың ете мөғжизәһе һәм еңеүселәрҙең фотографиялары менән бүләк фотоальбомы нәшер ителәсәк.

Бирелгән ғаризалар буйынса мәғлүмәт көн һайын www.ufasity.info сайтының Совет районы бүлегендә һәм "Уфимские ведомости" гәзитенең шишәмбе һанында урынлаштырып барыласаҡ. Заявкалар менән бергә тауыш биреү ҙә үтәсәк. 273-33-17 телефаксы аша йәки sovadm32@bk.ru электрон адресы буйынса тауыш бирергә мөмкин.

# ЭПИЛЕПСИЯНАН - ОПЕРАЦИЯ

**2011 йылдың 16 мартында Республика балалар клиник дауаханаһында республикала тәүге тапҡыр 13 йылдан ашыу эпилепсия менән яфаланған баланың баш мейеһенә операция яһалды.**

Бындай операцияға Башҡортостанда йәшәүсе һәм эпилепсия менән яфаланыусы 3000 баланың 10 процентына эпилепсияға ҡаршы препараттарҙың тәьҫир итмәүе сәбәпсе булды. Был төркөм пациенттар өсөн фәҡәт хирургик операция ғына һөҙөмтә бирә.

БР Һаулыҡ һаҡлау министрлығының штаттан тыш баш нейрохирургы, Республика балалар клиник дауаханаһының нейрохирургия бүлексәһе мөдире Айрат Тимершиндың һүҙҙәре буйынса, әлеге операция республика нейрофизиологтары, радиологтары, невропатологтары кәңәштәрен иҫәпкә алып башҡарылған.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Ошо көндәрҙә Өфөлә киҫкен эсәк инфекцияһы менән сирләүҙең ете осрағы теркәлгән, дүрт кеше дауаханаға эләккән. "Роспотребнадзор"ҙың БР идаралығы тикшереүҙәре буйынса был кешеләр "Gedza" ресторанында әҙерләнгән аҙыҡтан ағыуланған. Ресторан эше суд ҡарары менән 60 көнгә туктатылған, вазифалы кешеләр яуапҡа тарттырылған.

✓Былтыр Өфөлә 500-ҙән ашыу етем бала ғаиләле булған. 108 бала уллыҡҡа алынған, шуларҙың береһен АҠШ граждандары алған. Йыл һайын уллыҡҡа йә ҡыҙ итеп тапшырылған балалар һаны 13-15 процентҡа арта. Баланы үҙ ғаиләһенә ҡайтарыу ҙа мөһим йүнәлеш булып ҡала. Былтыр, мәҫәлән, 87 бала үҙ ғаиләһенә ҡайтарылған. 252 бала опекаға бирелгән. Уларҙың 12-һе интернат учреждениеларына кире ҡайтарылған. 10 бала патронатҡа тапшырылған.

✓Былтыр Өфөлә 119 троллейбус етештерелгән. Былтырғы йыл күрһәткестәре буйынса Өфө Рәсәй ҡалалары араһында троллейбустар етештереү буйынса икенсе урынға сыҡҡан.

✓Башҡортостандың юғары уҡыу йорттары был көндәрҙә "Асыҡ ишектәр" көнө үткәрә. Башҡорт дәүләт университетында ул 26 мартта 12 сәғәттә (белешмәләр өсөн телефон: 273-67-08), Башҡорт дәүләт медицина университетында 27 мартта 10 сәғәттән "Йәштәр" мәҙәниәт һарайында, Башҡорт дәүләт педагогия университетында - 31 мартта, Өфө дәүләт авиация техник университетында - 28 марттан 1 апрелгә тиклем, Өфө дәүләт нефть техник университетында - 2 апрелдә 13 сәғәттә, Өфө дәүләт сәнғәт академияһында 8, 15, 22 апрелдә үтә. "Ҡайҙа уҡырға барырға?" тигән һорауға яуапты уҡыусылар тап ошо сарала табасаҡ, тип ышана вуз етәкселәре.

✓Нефтселәр мәҙәниәт һарайында Әбйәлил йәштәре "Аҡ тирмә" башҡорт милли-мәҙәни үҙәге, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты һәм "Айыҡ Башҡортостан" төбәк ижтимағи хәрәкәте менән бергә "Хәмер - харам" тигән кисә үткәрҙе. 6 апрелдә тағы бер сара үтә - Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты "Айыҡ Башҡортостан" конкурсында ҡатнашыусылар өсөн семинар ойоштора.

**✔ Рәсәй Пенсия Фондының идаралыҡтарына 2010 йылдың октябре, ноябре һәм декабрендә икенсе балалары тыуған ғаиләләр 2011 йылдың 31 мартына тиклем бер тапҡыр түләнеүсе аҡсаны юллап мөрәжәғәт итә ала.**



бар. Шулай уҡ улар шәхси таҡта ярыу цехы ла тота. Ихаталарында өс еңел машина, трактор тора. 15 умарталары, бихисап эре малдары, утыҙлап һарыҡтары бар. Картуф, йәшелсә-емеште лә күпләп үҫтерәләр. Зөлфирә менән Нил Динисламовтар ҙа етеш тормош көтә. Быға улар күпләп мал аҫырап, быйма баҫып, ат санаһы, арба тәгәрмәстәре эшләп һатып өлгәшкән. Рита менән Әмирхан Динисламовтарҙың ҡырҡлап умарталары, таҡта ярыу цехы, ағас эшкәртеп, халыҡҡа утын әҙерләп һатыуҙары ҙур файҙа килтерә. Депутат, староста Ирек Ғарипов - үҙе лә фермер. Башта диләнкә алып, халыҡты әҙер утын менән тәьмин итһә, һуңғараҡ күпләп мал аҫырай башлаған. Ит, һөт, ҡаймаҡ һатып, табыш алған. Ғариповтар ғаиләһе иртә таңдан ҡара төнгәсә эш өҫтөндә. Күлде, гектарға яҡын ерҙе ҡуртымға алып, тағы ла дәртләнеп эшкә тотонғандар.

Үҫеп килеүсе быуынға ла ныҡ иғтибарлы көсәпәйҙәр. Мәктәп директоры Наил Йосопов йәш быуын эсергә өйрәнмәҫкә тейеш, тип үҫмерҙәргә иғтибарҙы арттырыуҙы талап итә. Көсәпәйҙә клуб юҡ, әммә мәктәптең иркен спорт залы клуб ролен дә үтәй. Йәштәр кистәрен бында волейбол, баскетбол, шахмат, шашка уйнарға йыйылһа, байрам мәлдәрендә ул тамаша залына әйләнә.

Айыҡ ауылда күҙгә күренеп ғаиләләр ныҡый, йәштәр ситкә китергә атлыҡмай, өй һалып, тыуған тупрағында төпләнә. Енәйәтселек, айырылышыуҙар тамырынан ҡорой. Ил алкоголь һаҙлығына батып барған мәлдә, көсәпәйҙәрҙең был афәтте ауыҙлыҡлап, башҡаларға матур өлгө күрһәтеүе, үҙе артынан башҡаларҙы ла эйәртеүе иғтибарға лайыҡ.

## Сыбаркүл ауылы

Ауыл 1926 йылда Лағырҙан бүленеп сыҡҡан кешеләр тарафынан нигеҙләнә. Дөйөм йыйылыш ҡарары менән уларҙың һәр ҡайныһына 6-шар дисәтинә ер бүлеп бирелә. Ауылдың тәүге урыны Әбдрәхим йылғаһы башы була.

Әле ауылда 70 шәхси хужалыҡта 200-ҙән ашыу кеше йәшәй, тәгәрмәсле 25 трактор иҫәпләнә. Башланғыс белем биреү мәктәбе, фельдшер-акушерлыҡ пункты, клуб бар, үҙ көстәре һәм ситтә йәшәгән ауылдаштары ярҙамы менән иман йорто һалғандар. Һәр ғаилә 5-6-шар һыйыр аҫырай. Айбулат Ғәйнетдинов, Дамир Ҡазиханов, Фларит Ғөбәйҙуллин, Ринат Мөхәмәтйәнов, Айҙар Хәйбуллин, Юрик Әхмәтшин иң күп мал тотоусылар иҫәбендә. Ҡатын-ҡыҙҙар һөт ризыҡтарын эшкәртеп, һатып аҡса эшләй. "Ауылда эш юҡ", тип түбәгә төкөрөп ятыусыларҙың ауыҙын ябырлыҡ дәлилдәре күп: шәхси эшҡыуар Фәтиховтар магазин асып, ауылдаштарын аҙыҡ-түлек менән тәьмин итһә, Сәлимә һәм Наил Әминевтарҙың шәхси хужалығында 15 баш һыйыр, өс баш йылҡы һәм ике тиҫтә һарыҡ тулып йөрөй, бынан тыш, 30 умарталары ла бар.

Спортҡа килгәндә инде, элгерәк СССР йыйылма командаһы ағзаһы, саңғы спорты буйынса спорт мастеры Риволь Ҡазыев республикала билдәлелек яулаһа, хәҙер келәм батыры, билбаулы көрәш буйынса донъя чемпионатында икенсе урын яулаусы Наил Мөхәмәтйәнов, билбаулы көрәш буйынса республика чемпионы, "рус лаптаһы"нда ла һынатмаусы Регина Мөхәмәтйәнова ауылдың данын тағы арттыра.

Үҙешмәкәрлектә лә һынатмай сыбаркүлдәр, теге йәки был конкурста ҡатнашып, призлы урындар яулай киләләр. Өлгө алыр ғаиләләр ҙә юҡ түгел уларҙа. Үҙҙәре ете балаға ғүмер биреп, туғандарының етем ҡалған өс балаһын тәрбиәләп үҫтергән Хәҙисә һәм Рәхип Хафизовтар, биш бала тәрбиәләп, "Әсәлек даны" миҙалын алыусы Рәзимә менән Радик Мөхәмәтйәновтар, Мәрфуға менән Илдар Хафизовтар, тырыш, күркәм ғаиләләре, уңған ул-ҡыҙҙары, кейәү-килендәре менән күркәм был ауыл.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Республикала иғлан ителгән "Айыҡ ауыл" конкурсында ҡатнашырға теләк белдереүселәр: Белорет районынан - Мөхәммәт, Ғафури районынан - Сәйетбаба, Хәйбулла районынан - Йәнтеш, Йәрмәкәй районынан - Ҡолбай, Күпсәнәй, Рәтамаҡ, Спартак, Әбйәлил районынан - Ҡырҙас һәм Әхмәт, Учалы районының Һөләймән ауылдары, барлығы 40-лап ауыл. Ғаризалар 1 апрелгә тиклем ҡабул ителә. Ә "Киске Өфө" гәзите "Айыҡ туй сценарийы"на конкурс иғлан итте. Конкурста ҡатнаша алырҙай сценарийҙар гәзитебеҙ биттәрендә баҫыласаҡ. Иң яҡшы авторҙар иҫтәлекле бүләктәргә лайыҡ буласаҡ.**

## ҺОРАУ - ЯУАП

### ХӘБӘР ИТМӘГӘНДӘР

**Элекке ирем үлгәс, уның икенсе никахынан тыуған улы, беҙгә хәбәр итмәйенсә, үҙе генә мираҫсылыҡ хоҡуғы алған. Элекке иремдән бәлиғ булмаған ҡыҙым бар, ул телефон аша атаһы менән аралашып торҙо. Атаһы шылтыратмай башлағас, туғандарынан беҙ уның үлеме хаҡында ишеттек. Бер йыл үтеп китте, беҙ, шулай итеп, мираҫҡа инеү хоҡуғын юғалттыҡ булып сығамы?**

- Эйе, һеҙ законда билдәләнгән ваҡытты ғәфү итерлек сәбәптәр арҡаһында үткәреп ебәргәнһегеҙ. Мираҫ эшен аҫҡан нотариусҡа бәлиғ булмаған бала мәнфәғәтендә мираҫ ҡабул итеү хаҡында ғариза менән мөрәжәғәт итегеҙ. Мәсьәләне хәл итеүҙән баш тартһалар, мираҫ ҡабул итеү ваҡытын оҙайтыуҙы һорап, судҡа ғариза яҙығыҙ һәм унда ғәфү итерлек сәбәптәр булыуҙы, атап әйткәндә, мираҫ ҡалдырыусы менән төрлө ҡалаларҙа йәшәүегеҙ, шул уҡ ваҡытта уның улының, башҡа мираҫсы ла барлығын белгән хәлдә лә, аңлы рәүештә был хаҡта нотариусҡа әйтмәүе тураһында ла яҙығыҙ.

### БЕР ЯҘҒАНДА БЕРӘГӘЙЛЕ ЯҘ

**2007 йылда васыят яҙғайным. 2010 йылда йорт һатып алдым. Васыят шарттары яңы йортҡа ҡарата ла ("үлгән көнгә булған бөтә мөлкәтем") ғәмәлдә буламы, әллә уны яңынан яҙырға кәрәкме?**

- Әгәр һеҙ васыятта аныҡ милек төрөн күрһәтмәйенсә, "үлгән көнгә ҡарата булған бөтә мөлкәтем" йәки "бөтә ҡалған мөлкәтем" тип яҙған булһағыҙ, васыятығыҙ уны яҙғандан һуң һатып алған милек төрөнә ҡарата ла ғәмәлдә була, яңынан яҙып тороу кәрәкмәй. РФ Граждандар кодексының 1120-се статьяһына ярашлы, васыят ҡалдырыусы васыятына теләгән бер милкен, шул иҫәптән киләсәктә һатып алынасағын да күҙҙә тотоп, тулы йөкмәткеле итеп яҙырға хоҡуҡлы.

### КҮМӘКЛӘП КӨРӘШЕГЕҘ

**Беҙҙең туғыҙ ҡатлы торлаҡ йорт тәҙрәләре аҫтында ғына машиналар ҡуялар. Быны тыйыусы ниндәйҙер ҡағиҙәләр барҙыр бит, моғайын?**

- Үкенескә ҡаршы, был һеҙҙең йортҡа ғына ҡағылышлы проблема түгел, һуңғы 3-4 йылда Өфө ҡалаһының бөтә урамдары һәм йорт алдары машиналар менән тулды. Йортта йәшәүсе башҡа кешеләр менән берләшеп, Өфө ҡала округы хакимиәте башлығына хат яҙып ҡарарға кәңәш бирәбеҙ. Күмәкләп тотонғанда, моғайын, мәсьәләне хәл итеүе еңелерәккә тура килер. Ғаризағыҙҙы, уның адресатҡа тапшырылыуын һорап, заказлы хат итеп ебәрегеҙ, тик конверт тышында аныҡ берәүҙең адресын күрһәтергә онотмағыҙ, сөнки яуап хаты кем исеменәләр ебәрелергә тейеш.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләне.**

Алғы яҡ өлөшкә каллозотомия менән һөйәк-пластик трепанация ярҙамында сөйәлле тәнсә - баш мейеһенең уң һәм һул ярымшарҙарын тоташтырыусы структураны киҫеү өйәнәк таралыуҙы һәм бер нисә минутҡа тиклем һушты юғалыуҙы иҫкәртә.

"Республикабыҙ нейрохирургтары махсуслаштырылған федераль медицина учреждениеларында һәм сит ил клиникаларында даими рәүештә һөнәр оҫталыҡтарын камиллаштыра. Мәҫәлән, әлеге операцияла ҡатнашҡан нейрохирург Резеда Ғәлимова 2010 йылда АҠШ-тың эпилептология клиникаһында стажировка үтте. Белгестәребеҙ тарафынан артабан да ошондай операциялар эшләүҙе дауам итеү кескәй пациенттарҙың тормош сифатын яҡшыртыуға булышлыҡ итер, тип ышанабыҙ", - ти больницаның баш табибы Рөстәм Әхмәтшин.

# ИКЕ БАЛА ТАП ҺӘМ...

**Башҡортостан Республикаһында бөгөнгө көнгә 101540 әсә әсәлек капиталына сертификатҡа эйә булды. Рәсәй Пенсия фондының БР буйынса идараһы етәксеһе Фоат Хантимеровтың һүҙҙәре буйынса, беҙ сертификат эйәләре һаны 100 мең кешенән артып киткән Мәскәү һәм Мәскәү өлкәһе, Краснодар крайы менән бергә сертификаттар иң күп тапшырылған өс төбәк иҫәбенә инәбеҙ.**

Икенсе балаға өс йәш тулыуҙы көтмәйенсә әсәлек капиталы аҡсаһын файҙаланыу йүнәлештәренең береһе - бер тапҡыр түләнелә торған 12 мең һум күләмендәге түләүгә эйә булыу. Ике йыл эсендә 136,6 ғаилә ошо мөмкинлектән файҙаланды, түләүҙәрҙең дөйөм суммаһы 1 миллиард 602 миллион һум тәшкил итте.

Рәсәй Пенсия Фондының ҡала һәм райондарҙағы идаралыҡтарына 2010 йылдың октябре, ноябре һәм декабрендә икенсе балалары тыуған ғаиләләр 2011 йылдың 31 мартына тиклем бер тапҡыр түләнеүсе аҡсаны юллап мөрәжәғәт итә ала. Был аҡсаны ғаиләләр үҙҙәренең көндәлек ихтыяжы өсөн файҙалана ала.

Пенсия фонды идаралыҡтары тарафынан торлаҡ кредиттарын ҡаплауға 4 миллиард 616,6 миллион һумға 15992 ғариза, торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға (кредиттарһыҙ) 3717 ғариза, балаларҙы уҡытыуға 193 ғариза һәм аҡсаны әсәнең буласаҡ пенсияһының тупланма өлөшөнә күсереүҙе һорап 5 ғариза ҡабул ителде. Шуныһын да билдәләп китеү кәрәк: 1087 ғариза әсәлек капиталы аҡсаһын үҙ көстәре менән торлаҡ төҙөүгә йәки яңыртып төҙөүгә күсереүҙе һораған ғаиләләрҙән алынды. Законға үҙгәрештәр индереү менән бәйле был яңылыҡ Рәсәй ғаиләләре өсөн 2010 йыл аҙағынан алып мөмкин булды.

Әсәлек (ғаилә) капиталының 2011 йылда индексацияланған күләме 365698,40 һум тәшкил итә, 4 йыл эсендә ул 115 мең һумға артты.

## ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



### Баш ауыртһа...

❖ балан һыуы эсергә; ❖ҡыҙыл көртмәле ашарға; ❖маңлайға, сикәләргә иҙеләп йомшартылған кәбеҫтә япрағы ҡуйырға; ❖ шәкәр диабеты менән яфаланмаһағыҙ, ә гел баш ауыртһа, стакандың дүрттән бер өлөшө күләмендә яңы һығылған картуф һуты эсергә тәҡдим итәлә; ❖ яңы өҙөлгән сирень сәскәһен баштың ауыртҡан еренә ҡуйырға була; ❖көнөнә өс тапҡыр стакандың дүрттән бер өлөшө күләмендә ҡара ҡарағат һутын эсергә; ❖ ярты стакан яңы әҙерләнгән кәбеҫтә һутын йылы көйө эсергә һәм 2-3 тырнаҡ һарымһаҡ ашарға.

### Аяҡтағы тамырҙар ауыртһа...

Тромбофлебит булғанда билсән ҙур дауа. Кәстрүлдән 1/2 йәки 1/3 өлөшөнә билсәнде тултыраһың да өҫтөнә һыу ҡояһың, 40-60 минут ҡайнатаһың. 4 сәғәт буйы йылы урында төнәтәһең. Шунан буяу-фәләнгә мансылмаған етен йәки кизе-мамыҡ туҡыманы бинт кеүек йыртып, әлеге төнәтмәгә тығып алаһың һәм тығыҙ итмәй генә аяҡтарға урайһың. Өҫтөнән полиэтилен ҡуйып, йылы туҡыма менән бәйләйһең. Был компресс 2 сәғәткә тиклем торорға тейеш. Йоҡларға ятҡанда сисәһең.

### Ҡайын бөрөһө

Ҡайын бөрөһөн апрель айында йыйырға. Ул тәндәге күп сирҙе дауалау сифатына эйә. Ҡайын бөрөләрен һурпа итеп бешереп эсәһең. Ул тәндәге артыҡ һыуҙы, дымды, үт һәм һейҙек юлдарындағы ҡом-таштарҙы, быуындарға ултырған тоҙҙарҙы ҡыуа, тәндәге төрлө шештәрҙе дауаларға ла ярҙам итә. Һыуыҡ тейгәндә эсәһең, тирләргә булышлыҡ итә. Ҡайын бөрөһө һурпаһын түбәндәгесә әҙерләйһең: бер ҡалаҡ ҡайын бөрөһөн бер стакан һыуға һалып, 10 минут талғын ғына утта ҡайнатырға һәм 1 сәғәт томалап тоторға. Һөҙәһең һәм көнөнә ике тапҡыр, ашағандан һуң яртышар стакан эсәһең; ❖ йөрәк ауыртҡанда шешенһән, бөрөнө ҡуберәк, 20 грамм тирәһе алаһың, сәй кеүек томалап бешерәһең һәм 3 сәғәт төнәтәһең, һөҙәһең, көнөнә 2 мәртәбә яртышар стаканлап эсәһең.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

✓ *Башҡорт теле уҡытыусылары һаман да балаларҙа туған телебеҙгә ҡарата һөйөү тәрбиәләү, һөйләшергә өйрәтеү урынына, теркәүестәр, киҫәксәләр, бәйләүестәр тураһында һабаҡ бирә. Ә "Шаяниум"ға килгәндә, бында нәҡ кирәһе.*



*МИЛЛӘТ БАЛҠЫШЫ*

**Баш ҡалабыҙҙа быйыл туғыҙынсы тапҡыр уҙғарылған уҡыусыларҙың "Шаяниум-2011" шаяндар һәм отҡорҙар конкурсы "Милләт-ара татыулыҡты нығытыу йылы"на арналып, "Берҙәмлектә - көс" девизы аҫтында үтте. Йылдан-йыл популяр була барған был конкурста быйыл барлығы 53 команда ҡатнашып, шуларҙан 22-һе һайлап алыу турҙарында үҙ көстәрен һынап, финалға 5 команда сыҡты. Йыл һайын күҙәтә килгән был сараны ысын мәғәнәһендәге милләт балҡышы тип атар инем.**


"ХХ Централ".


"Кендектәр".


"Башҡорттар.RU".


"ША-ШУ-ША".


"Ығы-зығы".

# "ШАЯНИУМ" ШАЯН УЙЫН ҒЫНАМЫ?

## Юҡ, сәмде уятыусы, йөрәктәрҙе ҡуҙғытыусы сара ла...

### Өфө - юмор "Васюки"һы

Әгәр ҙә был конкурсты Илья Ильф менән Евгений Петровтың "12 ултырғыс" әҫәре геройы, бөйөк комбинатор Остап Бендер килеп ҡараһа, көнләшеүенән ҡара яныр ине, моғайын. Ни өсөн тигәндә, провинциялағы ниндәйҙер ташландыҡ Васюки ҡалаһында Халыҡ-ара, Ғәләм-ара шахмат турнирын бөйөк комбинатор бары тик ундағы шахмат түңәрәгендә ҡатнашыусыларҙан аҡса йыйып алыу өсөн хыялында ғына тыуҙыра һәм башҡаларҙы алдай. Ә бына шунан бер ҙә кәм булмаған әһәмиәткә эйә булған Өфөләге "Шаяниум" шаяндар һәм отҡорҙар конкурсы хыялда ғына түгел - ысынбарлыҡта.

Һуңғы ваҡытта туған тел булараҡ, дәүләт теле булараҡ башҡорт телен уҡытыуҙағы етешһеҙлектәр әйтелеп, күптәр был тәңгәлдә асылда тел түгел, ә тел хаҡындағы фән, грамматика уҡытыуға ҡырҡа ҡаршы сығыш яһаны. Дәғүәләр дөрөҫ ҡуйылды ҡуйылыуға, әммә хәл үҙгәрмәне, йәғни башҡорт теле уҡытыусылары һаман да (тик айырым энтузиастарҙы иҫәпкә алмағанда) балаларҙа туған телебеҙгә ҡарата һөйөү тәрбиәләү, һөйләшергә өйрәтеү урынына, теркәүестәр, киҫәксәләр, бәйләүестәр тураһында һабаҡ бирә. Ә "Шаяниум"ға килгәндә, бында нәҡ кирәһе: балалар дөрөҫ һәм матур итеп башҡортса һөйләшергә өйрәнеп кенә ҡалмай, үҙенең ижади фекерләү ҡеүәһен дә үҫтерә. Тәүге йылдарҙа үткән конкурстар менән хәҙергеләрен сағыштырырлыҡ та түгел. Баланың фантазияһына ирек кенә ҡуй икән. Командаларҙың оригиналь исемдәрен генә атап үтеү ҙә күп нәмә тураһында һөйләй, мәҫәлән: "Талпан", "VIP йәштәр", "Депо Ханой", "Реали STAR", "Тағы ла 2", "Сәтәкәй", "Ҡыҙыҡ мажор", "Һупайлы дәрүиштәре", "Рәссамдар", "Кендектәр", "Ығы-зығы", "ША-ШУ-ША", "Башҡорттар. RU", "ХХ Централ", "БТУ",

"Камеди ҡыҙҙар", "Берҙәм егерме берҙәр", "Көлдөрткөс", "145-се бульвар", "Утлы йөрәктәр", "Ах, ох, ух". "Өфө йәштәре", һ.б. Быйыл, мәҫәлән, һүҙҙәрҙе дөрөҫ әйтеү, интонация йәһәтенән балаларҙың барыһына ла "бишле" билдәһе ҡуйыр инем. Был уларҙың башҡорт теле дәрестәрендә грамматика уҡыу һөҙөмтәһе түгел, әлбиттә.

### Сәм көсө

Өфө ҡала округы хакимиәтенең Гуманитар мәсьәләләр бүлеге мәғариф идаралығы, йәштәр комитеты ойошторған был сара һәр йәһәттән сәптең нәҡ уртаһына тейә. Мәҫәлән, дәүләт теле булараҡ башҡорт телен баш ҡаланың урыҫ, татар телле һәм башҡа мәктәптәрендә уҡытыуҙы ойоштороуҙа был конкурстың әһәмиәте иҫ киткес ҙур. Ҙур, тием, сөнки конкурста ҡатнашырға ынтылып тороусы урыҫ һәм татар телле мәктәптәр командаларының фиҙаҡәрлегендә сағыла был ынтылыш. Мәҫәлән, былтыр ул командалар нәҡ башҡорт телен насар белеүе арҡаһында һайлау турына ла үтә алмағайны. Быйыл иһә, улар телде яҡшы үҙләштереүҙәрен иҫбат итте, финалға үтә алмаһалар ҙа һайлау турҙарында төрлө урындар һәм номинациялар яуланы. Кемгә нисек тойолғандыр, миңә, мәҫәлән, "Шаяниум"-дың сәм көсө хәрәкәткә килгән кеүек тойолдо. Командалар ағзалары үҙҙәре менән ярышҡа сығыусы дәғүәселәрен, уларҙың ни уйлауҙарын бик яҡшы белә, шуға төрттөрә, эләкләй, һәр хәлдә, конкурстың ижади мөхите иҫ китмәле киң һәм ҡыҙыҡлы. "Башҡорттар. RU" командаһының йомғаҡлауҙағы бүләкләү мәлендә сәхнәлә булмауҙарын күптәр "һеркәләренең һыу күтәрмәүенә" бәйләргә тырышһа ла, мин ошо "протеста" сәм көсөнән тыуған намыҫланыуҙы күрәм һәм уны тәбиғи күренеш тип атайым.

Үҙ ваҡытында нисек итеп Протазановтың "Салауат Юлаев" фильмы милләтебеҙҙең рухын күтәреүгә булышлыҡ иткәнен яҡшы беләбеҙ. Оло-лар һөйләүенсә, һуғыштан алдағы балалар Салауат батыр булып уйнаған. Башҡорт кавалерия дивизияһы яугирҙары ла фашистар менән алышҡа инер алдынан ошо фильмды ҡарап рухланған, тиҙәр. Шуның кеүек, киләсәктә "Шаяниум" шаяндар һәм отҡорҙар конкурсында үҫеп килгән быуында туған телебеҙгә ҡарата һөйөү тәрбиәләү кимәленә еткерерлек мөмкинлектәр ҙә бар. Ҡыҫҡаһы, бында яңы велосипед уйлап сығарырға түгел, конкурсты тағы ла камиллаштырырға ла камиллаштырырға...

**Әмир ҒҮМӘРОВ.**

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Шаяниум-2011" Шаяндар һәм отҡорҙар конкурсында урындар түбәндәгесә билдәләнде:**

**Гран-при - "ХХ Централ" командаһы, Ф.Мостафина исемендәге 20-се башҡорт гимназияһы;**

**I урын - "Кендектәр", М.Кәрим исемендәге 158-се башҡорт гимназияһы;**

**II урын - "Башҡорттар.RU", Республика башҡорт лицей-интернаты; "ША-ШУ-ША" - 122-се башҡорт гимназияһы;**

**III урын - "Ығы-зығы", 140-сы башҡорт гимназияһы.**

**"Шаяниум"дың Положениеһына ярашлы, уҡытыу рус телендә барған, башҡорт телен дәүләт теле булараҡ өйрәнеүсе командалар араһында ла урындар билдәләнде:**

**1-се урын - "Талпан" командаһы, 114-се мәктәп;**

**2-се урын - "Өфө йәштәре", 23-сө мәктәп;**

**3-сө урын - "Ах,ох, ух", 46-сы лицей.**

**Номинациялар: "Иң яҡшы ир-егет роле" - Айрат Хоҙайбирҙин ("ША-ШУ-ША"), Айназ Муллағолов ("Ығы-зығы"); "Иң отошло шаяртыу" - "ША-ШУ-ША"; "Тамашасы һөйөүен яулаусы" - Руслан Ғәлиев ("ХХ Централ"); "Үҙенсәлекле юмор" - "Һупайлы дәрүиштәре"(136-сы Башҡорт лицейы); "Берәү бөтәһе, бөтәһе берәү өсөн" - "Сәтәкәй" (48-се Башҡорт лицейы); "Үҙенсәлекле команда" - "Рәссамдар"(Ҡ. Дәүләткилдиев исемендәге Республика художество гимназия-интернаты); "Өмөт" - "Ҡыҙыҡ мажор" (Ғ.Әлмөхәмәтов исемендәге Республика музыка гимназия-интернаты).**

**Былардан тыш, бик күп командалар "Шаяниум-2011" шаяндар һәм отҡорҙар бәйгеһендә әүҙем ҡатнашҡаны өсөн" һәм төрлө ойошмаларҙан махсус бүләктәр менән билдәләнде.**

ТАРИХ АУАЗЫ

**Тарих, көн һайын уҡ булмаһа ла, йыш ҡына үҙенең туҙан баҫҡан биттәрен асып, һоҡландырырлыҡ, аптыратырлыҡ яңылыҡтары менән таныштырып тора. Һуңғы тиҫтә йыл эсендә баш ҡаланың үҙәгендә тиерлек табылған Өфө-II ҡаласығы ла тап шундайҙарҙан булды. Унда инде биш йылдан ашыу етди ҡаҙыныу эштәре алып барылһа ла, әлегәсә уны тарихи ҡомартҡы тип танып, дәүләт һаҡлауы аҫтына алырға ашыҡманылар. Ниһайәт, 14 мартта Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте башлығы Рөстәм Хәмитовтың бойороғона ярашлы, ҡаҙыныу эштәре алып барылған урын "Боронғо Өфө" тарихи-мәҙәни музей-ҡурсаулығы тип иғлан ителде. Ошо уңайҙан баш ҡала ҡунағы, Рәсәй Фәндәр академияһы Археология институтының ғилми хеҙмәткәре Игорь Кызласов һәм академик Нияз Мәжитов матбуғат конференцияһында журналистарҙы ҡыҙыҡһындырған һорауҙарға асыҡлыҡ индерҙе.**

# БАШҠОРТ ТИГӘН ҠАЛА БУЛҒАН ҺӘМ...

## ул хәҙерге Өфөгә нигеҙ һалған




Өфө-II ҡаласығы 1953 йылда билдәле крайҙы өйрәнеүсе Петр Ищериков тарафынан табыла һәм артабан уны төрлө йылдарҙа Мәксүдә Садиҡова, Владимир Овсянников, Нияз Мәжитов өйрәнә. Башҡорттар борон үҙҙәре был ҡаланы нисек атағандыр, әммә испан картографы Меркаторҙың 1554 йылғы картаһында хәҙерге Ҡариҙел йылғаһы тамағында урынлашҡан ҡала Башҡорт (Башкирти) тип атала. Әлеге Киров районы территорияһында шундай алты ҙур археологик ҡомартҡы - ҡала-ҡәлғә булыуы билдәле, уның өсөһө Дуҫлыҡ монументы районында, ә Өфө-II ҡаласығы Пушкин урамының аҫҡы өлөшөндә урынлашҡан. Һәм ул мәҙәни ҡатламы дүрт, урыны менән унан да күберәк метрҙаса еткән иң ҡеүәтлеһе һанала. Ҡаҙыныу эштәре һөҙөмтәһе ҡаласыҡтың мең йылдан элек нигеҙләнеүен раҫлай. Иң тәүге һәм билдәле датаға бәйләнгән табыш - 1828 йылда табылған алтын Византия тәңкәһе. Уның тураһында 1832 йылда Рәсәй академия журналында ла яҙып сығалар. Артабан да крайҙы өйрәнеүселәр бик күп алтын һәм башҡа биҙәүестәр, шулай уҡ VII быуат аҙағы, VIII быуат башы менән билдәләнгән алтын Византия сылбырының фрагментын таба. Хәҙерге Медуниверситеттың административ бинаһы урынында беҙҙең эраның VII-VIII быуатына ҡараған бай әйберҙәр табыла.

Беҙҙең осорҙа Өфө-II ҡаласығы буйынса етди эш 2006 йылдың ноябренән 2007 йылдың 30 ғинуарына тиклем алып барыла. Ҡаҙыныу эштәре барышында археологтар беҙҙең эраның VII-VIII быуатына ҡараған алтын һәм көмөш изделиеларҙың фрагменттарына юлыға. Алтын Урҙа осоро тәңкәләре лә ҙур табыш була.

Республика Хөкүмәте бойороғо нигеҙендә бер нисә йыл дауамында музейҙың проект документтары әҙерләнәсәк. Әле яҡынса күҙаллауҙар буйынса унда тамашасыны ҡыҙыҡһындырырлыҡ мәлдәр күрһәтеләсәк. Мәҫәлән, реконструкцияланған, реставрацияланған торлаҡ, таҡта түшәлгән юлдар күрһәтелеүе мөмкин. Бәлки, ул участкаының ниндәйҙер өлөшөн тәшкил итер. Шулай уҡ экспозициялар залы булыуы күҙаллана һәм унда ошонда ҡаҙыныу эштәре алып барылғанда табылған ҡомартҡылар үҙ урынын аласаҡ. V быуаттан уҡ билдәле Башҡорт ҡалаһы менән XVI быуаттан билдәле урыҫ ҡәлғәһенең генетик бәйләнеше сағылдырылыуы ихтимал. 2012 йылда инде "Урта быуаттағы Өфө ҡалаһы. Ялан Евразияһының урта быуат цивилизациялары диалогы" темаһы буйынса халыҡ-ара ғилми-ғәмәли конференция уҙғарыу ҙа ҡаралған. Унда Ҡытай, Япония, Урта Азия ғалимдары, ЮНЕСКО вәкилдәре саҡырыласаҡ. Уның нигеҙендә Өфөнөң йәшен ҡайтанан ҡарау мөмкин буласаҡ.

- Археологик ҡаҙыныу эштәренең төп маҡсаты - Өфөнөң йәшен ҡайтанан билдәләү түгел. Беҙ, археологтар, тарихты бөгөнгөгә тапшырыу бурысын йөкмәгәнбеҙ һәм ошо маҡсатта эшләйбеҙ. Әммә V быуатта уҡ гәрәп, испан картографтары төҙөгән картала Башҡорт тип аталған ҡала бар һәм тикшеренеү эштәре лә быны асыҡ дәлилләй икән, әлбиттә, баш ҡалабыҙҙың йәшен ҡабаттан ҡарарға, аныҡ датаны билдәләргә кәрәк, - тине академик Нияз Мәжитов һәм һүҙен дауам итеп, боронғо ҡаланың үҙенсәлектәренә туҡталды. - Мин 50 йылдан ашыу Урал-Себер территорияһында археологик һәйкәлдәрҙә ҡаҙыу эштәрендә ҡатнашам, әммә миңә, тәжрибәле археологҡа, төрлө мәҙәниәткә ҡараған ҡатламдарҙың булыуы аңлашылманы. Сөнки 4 метрлыҡ ҡатламда ҡатлам аралары 3-4 сантиметрҙан алып, 10-20 сантиметрға еткән урындары ла бар. Был - беҙҙең ҡомартҡының айырылып торған үҙенсәлеге. Шул аңлап бөтмәгән нәмәләр булғанға беҙ РФ Фәндәр академияһының Археология институты белгестәренә мөрәжәғәт иттек. Улар бындай ҡатламдарҙың шыйыҡ балсыҡ булыуын, уларҙы ағас рамдар ярҙамында һалыуҙарын аңлатты. Бындай үҙенсәлек, оригиналлек V быуаттан беҙҙең көндәргәсә һаҡланған. Шулай уҡ таҡтанан һалынған урамдар ҙа үҙенсәлекле. Улар хәҙерге тротуар ролен үтәгән һәм уның буйлап ҡаланың почетлы граждандары йөрөгән. Коллегаларым миңә, беҙ һинең әйткәндәреңә, Өфөлә урта быуаттарҙан һаҡланған ҙур ҡала булыуына ышанмағайныҡ, ағас түшәлгән урамдарҙы күргәс, шиктәребеҙ юҡҡа сыҡты, тине.

Яҙма сығанаҡтарҙан күренеүенсә, XV-XVI быуаттарҙа бында башҡорт хандарының резиденцияһы, артабан инде нуғай наместниктарының резиденцияһы урынлаша. Ошо территорияла ҙур башҡорт ҡалаһының булыуы хаҡында бөйөк урыҫ тарихсыһы Рычков һәм башҡа авторҙар ҙа яҙа.

Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте башлығының бойороғона ярашлы, хәҙер ҡаласыҡ территорияһы һаҡланыусы зона тип иғлан ителде һәм унда төрлө хужалыҡ, төҙөлөш эштәре алып барыу тыйыла.

Нияз Абдулхаҡ улы Өфө-II ҡаласығы менән таныштырға килгәнендә Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитовтың, археолог булмаһа ла, балсыҡ ҡатнашмаларының Урта Азия, Яҡын һәм Урта Көнсығыш халыҡтары өсөн хас булыуын билдәләүен һыҙыҡ өҫтөнә алды. "Ысынлап та, бындай төҙөлөш материалы Ҡаҙағстан, Үзбәкстан, Тажикстан, Төркмәнстан өсөн хас, - ти Нияз Мәжитов. - Беҙ ошонда йәшәүсе ғалимдар менән һөйләшеп, аралашып, уларҙа ла шундай уҡ тарихи ҡомартҡылар - боронғо ҡалалар булыуын асыҡланыҡ. Мин шунда Көнсығышты өйрәнеүсе бөйөк ғалим Әхмәтзәки Вәлидизең Урта Азияның көньяҡ территорияһында әлегәсә Башҡорт тауҙары тип аталған тау теҙмәләре булыуын, Үзбәкстан менән Тажикстан сигендә Башҡорт ҡалаһы, Башҡорт дәүләте булыуын яҙып ҡалдырыуының юҡҡа булмауын аңланым. Боронғо яҙма сығанаҡтарҙа өйрәнеүсе ғалим VI-VIII быуаттарҙа бында башҡорттар йәшәүен күҙаллай. Унда әле лә Башҡорт ҡалаһы һәм Башҡорт тауҙары бар, күрһәң, был ошо ерҙә йәшәгән башҡорттар иҫтәлеге булып тороп ҡалған. Миндә, Әхмәтзәки Вәлиди, Урта Азиялағы үҙҙәрен башҡорт тип атаусы халыҡтың, ҡәбиләнең күсенеүе һөҙөмтәһендә башҡорт этнонимының килеп сығыуын күҙаллап, хаҡлы булған, һәм быны артабан тикшереп нигеҙләргә кәрәк, тигән фекер тыуҙы. Һәр хәлдә, әлеге Өфө ҡалаһы урынындағы Башҡорт ҡалаһының да башҡорттар ҡатнашлығында барлыҡҡа килеүе бәхәсһеҙ. IX быуатта башҡорттар тирә-яҡтағы барлыҡ халыҡтарҙың хәтерендә, теләндә урын алып, яҙма сығанаҡтарҙа ла һаҡланып ҡалған".

- Бәлки, төп археологик сер ҡаланың ни өсөн бер урында оҙаҡ тороуындалыр, - тип башланы һүҙен РФ Фәндәр академияһы Археология институтының ғилми белгесе Игорь Кызласов. - Бында ҡала мәҙәниәте күҙгә ташланып тора. Беренсенән, айырым форма буйынса яһалма эшләнгән балсыҡты ҡулланып төҙөлгән монументаль архитектура, һаҡланыу дипарҙары булған. Икенсенән, көнкүреш архитектураһы дөрөҫ, регуляр, квартал планлаштырыуға буйһона. Археология фәне, ғалимдар, фән көтмәгәндә Көньяҡ Уралда ҡала цивилизацияһы булыуын раҫлаусы ҡомартҡыға юлыға. Көнбайыш һәм Көнсығыш Европала, Рим һәм Византия ҡалаларын иҫәпләмәгәндә, бишенсе быуаттан алып мең йылдан ашыу үҙен ҡала мәҙәниәте үҙәге итеп һаҡлаған бер генә ҡаланы ла тапмаҫбыҙ. Өсөнсөнән, был һәйкәлдең мөһим үҙенсәлеге шунда - ул килеп сығышы буйынса төрлө булған мәҙәниәттәрҙе берләштерә. Ике йылғасыҡ һәм бер ҙур йылға тамағында урынлашыуы уны урман зонаһы ҡалаларына индерә, әммә ағас нығытмалар урынына беҙ балсыҡ конструкциялар күрәбеҙ. Ә улар ялан зонаһы өсөн хас. Бында ошо ике мәҙәниәттең гармонияһы бәйләнештә булыуы асыҡ сағыла.

Артабан, алыҫтан, Византиянан килгән ҡиммәтле әйберҙәр, тәңкәләр Византия менән бәйләнеште раҫлай. Был да фән өсөн һирәк күренеш. Әлбиттә, ниндәй - сауҙамы, илселекме - бәйләнештәр булыуын ныҡлы раҫлау өсөн материалдар етеңкерәмәй. Аңлауыбыҙса, V быуатта Византия кеүек ил күршеләренә сәйәси, мәҙәни һ.б. ҡыҙыҡһыныуы булғанда ғына иғтибар иткән. Әммә боронғо Өфө ҡаласығы уға күрше түгел. Шулай ҙа бында ниндәйҙер тышҡы бәйләнештәр булған. Быны ла асыҡлау зарур. Урында етештерелгән көнкүреш әйберҙәре лә төрлө мәҙәниәтте сағылдыра. Тимәк, бында төрлө милләт вәкилдәре йәшәгән. Ҡалаларҙың үҙенсәлеге булып һәр заманда ла күп милләтлелек тора. Был - кешелек тарихында ниндәй генә быуатта булмаһын, ҡалаларҙың башҡа тораҡтарҙан айырмаһы. Ә төрлө сығышлы кешеләр ни өсөн бер урынға йыйыла? Әлбиттә, унда үҫешкән дәүләт системаһы булғанға.

Әле беҙҙең тарих фәне ике нәмәгә әҙер түгел. Беренсеһе, беҙгә мәғлүм булған сауҙа юлынан ситтә шундай ҙур ҡалаларҙың булыуы. Сөнки беҙ быны Волганың тура юлы тип раҫлай алмайбыҙ, ә уның бер тармағы ғына булыуы мөмкин. Ләкин Волгала ла, Днепрҙа ла V быуаттан алып мең йыл торған ҡалалар юҡ. Тимәк, беҙгә был ҡаланың нисек йәшәүе, кешеләрҙе нимә ылыҡтырыуы, Көньяҡ Европаның, атап әйткәндә, Уралдың, иртә Урта быуаттың иҡтисади географияһы тураһындағы ҡарашты үҙгәртергә тура киләсәк. Икенсенән, дәүләтселектең формаһы ниндәй булыуы хаҡында уйларға кәрәк. Бер кем дә был эпоханы юғары социаль административ идара итеү ваҡыты итеп күрһәтмәне. Ләкин ҡала VIII-X быуаттарҙан, Алтын Урҙа осоронан йәшәй, шуныһы ул нисек картаға эләкһен. Һәм һис шикһеҙ ул хәҙерге Өфө ҡалаһы барлыҡҡа килеүгә нигеҙ булып торған. Тимәк, бында V быуаттан уҡ административ, мәҙәни, сауҙа һ.б. үҙәк булған. Юҡҡа ғына 1375 йылда гәрәптәр тарафынан төшөрөлгән картала ул Башҡорт (Башкирти) тип билдәләнмәгән һәм эргәһендә Урҙа ханы Джанибектың һүрәте төшөрөлмәгән.

Археология фәне өсөн Өфө-II ҡаласығы бик ҡатмарлы, көтөлмәгән һәм ишетелмәгән, әлегәсә аңлашылмаған һәм аңлап булмаған археологик ҡомартҡы. Үҙегеҙ күрәүегеҙсә, уны өйрәнгәндә төрлө йүнәлештәргә мөрәжәғәт итеү зарурлығы тыуа. Шуға күрә Башҡортостан Хөкүмәтенең бында музей-ҡурсаулыҡ төҙөү тураһындағы ҡарары бик әһәмиәтле. Сөнки ҡомартҡыны өйрәнеү оҙаҡ йылдар дауам итәсәк әле.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бишенсе быуаттан уҡ Башҡорт атамаһы аҫтында билдәле ҡала урынында ойоштороласаҡ музей-ҡурсаулыҡ ни өсөн боронғо атамаһын алырға лайыҡ түгел икән, тигән һорау ғына тел осонда урала ине лә... Ул һорауға әле гәзит биттәрендә әйләнеп ҡайтылыр, моғайын.**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

✓ *50-се, 60-сы йылдарҙа Яҙыусылар союзында ағза булыусыларҙың һаны 50-гә лә тулмаған һәм улар тыуҙырған әҫәрҙәр күләме, һаны, сифаты буйынса хәҙерге әҙәбиәткә ҡарағанда күпкә юғары торған.*



**Ер шары халҡы технократик үҫеш, матди байлыҡ туплау юлын һайлап, бының менән кешелектең донъяла йәшәү мөҙҙәтен бер нисә йөҙ мең йылға ҡыҫҡартты, ти ғалимдар. Ысынлап та, беҙ был хәҡиҡәткә йылдан-йылға, көндән-көнгә нығыраҡ инана барабыҙ кеүек. Ҡыҫҡаһы, үҙебеҙҙең йәшәү шарттарын яҡшыртыу хаҡында ғына уйлап, киләсәк быуындарҙың, ейән-ейәнсәрҙәребеҙҙең, бүләр-бүләсәрҙәребеҙҙең, тыуар-тыуасарҙарыбыҙҙың өлөшөнә инәбеҙ һымаҡ. Кем белә, бәлки, кешелек йөрәге, аҡылы, аңы тыуҙырған сәнғәт, мәҙәниәт һәм әҙәбиәт апокалипсисты күпмелер ваҡытҡа һуҙыр өсөн сара булараҡ та формалашҡандыр. Нимә генә тимә, кешелектең тәүге вәкилдәренең береһе булып яралған Урал батырҙың васыятына кешелек тоғро була алманы. Үкенескә ҡаршы...**

**Ошо йәһәттән милли әҙәбиәттең тәүге төп бурысы, маҡсаты милләтте һаҡлау икәнлеге һис һүҙһеҙ аңлашыла. Әгәр ҙә милли әҙәбиәт үҙенең ошо төп бурысын үтәүҙән тайпыла икән, уның рух кимәле лә түбән була. Был да аксиома. Ғөмүмән, мәғлүмәт һәм аң-һыҙат юлы (цивилизация) быуаты һаналған дәүерҙә милли әҙәбиәт нимәгә һәләтле? Барлыҡ мөнәсәбәттәр аҡсаға ҡоролған һәм көйләнгән заманда рухи ҡиммәттәр хаҡында һүҙ йөрөтөү берҡатлылыҡ булып тойолмаймы? Бөгөнгө башҡорт әҙәбиәтенең кимәле ҡайһылайыраҡ? Ошо һәм башҡа мәсьәләләр хаҡында әҙиптәр: күренекле яҙыусы Ғәлим ХИСАМОВ менән билдәле шағир, филология фәндәре докторы Фәнил КҮЗБӘКОВ әңгәмәләшә.**

▸ **Ни өсөн хәҙерге заманда милли әҙәбиәт милләттең төп идеологик трибунаһы кимәленә күтәрелә, рух үҙәгенә әүерелә алмай тип уйлайһығыҙ?**

**Ғ. Хисамов:** Һорау бик үткер һәм киҫкен. Ул һорау ғына түгел, үтә ҡырҡыу баһа ла. "Рух үҙәгенә әүерелмәгән", бүтәнсә әйтһәң, аҡланмаған өмөт, шалтырауыҡ буш һауыт булып сыға. Ҡатыраҡ әйтелгән, әммә уҡ сәптең ҡап уртаһына ҡаҙалған.

50-се, 60-сы йылдарҙа Яҙыусылар союзында ағза булыусыларҙың һаны 50-гә лә тулмаған һәм улар тыуҙырған әҫәрҙәр күләме, һаны, сифаты буйынса хәҙерге әҙәбиәткә ҡарағанда күпкә юғары торған. Ул саҡта Яҙыусылар союзына йылына бер генә кеше алынған. Ҡабул ителеүселәрҙең һаны ике, өс булыуы бик һирәк күренеш һаналған. Баязит Бикбай идара рәйесе булғанда ғына тәүге тапҡыр Ноғман Мусин менән бергә өс кешене ағзалыҡҡа ҡабул иткәндәр. Ләкин беҙ бөгөн Ноғман Мусин тыуҙырған әҫәрҙәр йөҙөндә сифатрешә башлайбыҙ. Ике-өс китабы донъя күрһә, автор "билдәле" шағирға йә яҙыусыға әүерелә. Тағы ла бер-икәүһе баҫылһа, премия юллау хәстәре ҡалҡа. Йәнә бер-ике китаптан һуң Салауат премияһын биреп, халыҡ яҙыусыһы йә шағиры исемен таға һалып, "бөйөк" яһайбыҙ. Тик бар китаптарын йыйып, ныҡлабыраҡ һелкһәң, рух үҙәге түгел, әҫәр атамаһына лайыҡ булырлыҡ та нәмә ҡалмай. Бына ошондай хәлдә бөгөн беҙҙең әҙәбиәт. Үҙемдең яҙғандарҙы ла келектең, енәйәтселектең төп сәбәбе барыбер ҙә ярлылыҡҡа барып тоташа. Диоген һымаҡ мискә эсендә йәшәп тә ҙур фекерҙәр әйтергә мөмкин, әммә мискә эсендә оло шәхесте тәрбиәләп булмай. Матди хәлебеҙ бик үк шәптән түгел, ләкин тормошта күп нәмә сағыштырмаса бит. Әлеге хәлебеҙҙе үткән быуаттың 60-сы йылдары менән сағыштырып ҡараһаҡ, хәлебеҙ бөтөрөнөп китерлек тимәҫ инем. Шул уҡ ваҡытта 60-сы йылдар кешеһенең : "20 йылдан төҫлө. Һайлауҙарға халыҡтың аҙ барыуы ла ундағы өмөт-ышаныстың һүнә барыуын күрһәтә. Халыҡ "Власҡа кем килһә лә, бер нәмә лә үҙгәрмәйәсәк" тип уйлай. Сөнки власть менән халыҡ айырыла бара. Ә инде улар араһында булырға тейешле әҙиптәр үҙ яйын ғына ҡараған һымаҡ. Беҙ бөгөн бөтөн донъяла барған иҡтисади көрсөк хаҡында һөйләйбеҙ. Уның башы Америкала. Шул тиклем бай, ҡеүәтле илдең көрсөккә килеп терәлеүенең төп сәбәбен мин рухи ныҡлыҡ булмауҙа, матди байлыҡҡа табыныуҙа күрәм. Беҙҙең илгә лә һуғыш һәм унан һуңғы осорҙа бик еңел булмаған. Илебеҙ халҡы өмөтләнеп йәшәгәнгә ауырлыҡтарҙы еңеп сыҡҡан. Ил халҡын алға әйҙәрлек идея булған. Әгәр ҙә шундай алға әйҙәүсе көс булмаһа, беҙ юғалып ҡалыр инек. Бөгөн халыҡты берләштереүсе көс бик самалы. Уның көсөн уятыр өсөн һуңғы сиккә еткерергә лә ярамай. Тарихтан француз яуын ғына алып ҡарайыҡ. Лев Толстой рус армияһының Мәскәүҙе биргәндән һуң халыҡтағы асыу-

# НИ МӘҒӘНӘ ДӨРӨҪ

## дөрөҫ һүҙең

Яуап бирерҙән элек, рух төшөнсәһен асыҡлайыҡ һәм әҙәбиәт ни эшләп рух үҙәге булырға тейеш әле, тигәнде билдәләйек. Рух - ул аң, аҡыл һәм күңел ҡушылдығы. Рух - башҡорт рухын күҙҙә тотам - кешене бала саҡта тиҙерәк үҫергә, батыр йә матур булырға; ҙурайғас, алдынғы, бөйөк, мәғрүр булырға әйҙәп торған көс. Беҙҙең әҙәбиәткә рухи үҙәк булыу шартын үҙебеҙҙең телдә һөйләшкән кешеләр халыҡ рәүешенә инә башлаған дәүерҙә барлыҡҡа килгән әҙәбиәт өлгөләре ҡуйған. Бынан 4 мең йыл элек тыуған "Урал батыр" эпосы - рух үҙәгенең өлгөһө. "Урал батыр"ҙың һәр һөйләме, һәр шиғри юлы кешене ҡайһылай тәрбиәләргә өйрәтеүҙән башлап, иркен, йән, тән рәхәтендә йәшәр өсөн ҡайһылайтып көрәшергә икәнлегенә тиклем әйтеп бирә. "Урал батыр" һәр башҡорттоң рухын һуғара, шуға күрә лә дүрт мең йылдан ашыу телдән-телгә яттан күсеп йәшәй ул. "Урал батыр"ҙа меңәр йыл дауамында йыйылған аҡыл да, кешенең һәр береһенә кәрәкле иң алдынғы аң да, иң нескә ҡылдарҙы сиртер моң да, даръяларҙай йәйрәп ятҡан киңлек һыйған күңел дә бар.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бындай әҫәр бөгөнгө башҡорт әҙәбиәтендә юҡ. Шундай әҫәрҙәр ижад итмәй тороп, әҙәбиәт рух үҙәгенә үтә алмаясаҡ. Беҙ ҙур әҙәбиәт тыуҙырырлыҡ мөмкинлегебеҙ булған милләтбеҙ. Халҡыбыҙ бөйөк булған кеүек, әҙәбиәтебеҙ ҙә бөйөк булырға тейеш ине. Кем ҡамасаулай һуң бындай әҫәрҙәр яҙырға? Үҙебеҙ. Беҙҙең яҙыусыларҙың бик күбеһенең "үҫеү" юлына күҙ һалайыҡ әле. Һуңғы ваҡытта әҙәби әҫәрҙәргә талап бик түбәнәйҙе. 50-се, 60-сы йылдарҙа Яҙыусылар союзында ағза булыусылартың юғары булыуы хаҡында әйтә алабыҙ. Шуға күрә Ноғман Мусин, ысынлап та, халыҡ яҙыусыһы исеменә лайыҡ яҙыусы. Уның әҫәрҙәрен халыҡ, ысынлап та, яратып



уҡый. Һәр хәлдә, ул саҡта Ноғман Мусинды Яҙыусылар союзына ағза итеп алыусылар яңылышмаған.

Хәҙергене алайыҡ. Бөгөн халыҡ шағирҙары һәм яҙыусылары шул тиклем күбәйҙе, уларҙың хатта исемен теҙеп һанау ғына түгел, кемдәр икәнен иҫтә ҡалдырып та булмай. Әҫәрҙәре тураһында әйтеп торорға ла түгел. Башлап яҙышҡан дәүерҙә (был осор 40-50 йәшкә тиклем дә булғылай) рифма, ритм тура килгән бер шәлкем шиғыр, арлы-бирле хикәйә яҙҙы ниһә, "был ҡәләм өмөтлө күренә", тип китабын сығарыу өсөн йүгешулар рәтенә индерәм. Ҡайһы саҡта хатта: "Киләсәктә булырмы икән әҙәбиәт?" - тип тә уйланаһың. Булыр, әгәр ҙә үҙебеҙҙе үҙебеҙ төҙәтә алһаҡ. Беҙгә әҙәби әҫәргә талапты киренән күтәрергә кәрәк. Беҙгә кем ҡамасаулай һуң быны эшләргә? Әҙәбиәтте Президент та, Хөкүмәт тә тыуҙыра алмай. Әммә яҙыусының мейеһенә йоғонто яһап була. Яҙыусылар союзы эшләргә тейеш быны.

**Ф.Күзбәков:** Ғәлим Афзал улы был һүҙҙәрҙе йөрәгенән сығарып әйтте. Мин уның әйткәндәре менән килешәм. Шулай ҙа, ни өсөн әҙәбиәт милләттең рух үҙәгенә әүерелә алмай һуң? Сәбәптәре бик күп. Әлеге ваҡытта йәмғиәт рухи ҡиммәттәргә өҫтөнлөк бирерлек кимәлдә лә түгел. Ни өсөн тигәндә, әҙәм балалары тәү сиратта элементар йәшәү шарттарын хәстәрләргә мәжбүр. Һәр кемгә лә ашап-эсергә, кейенергә, ҡайҙалыр йәшәргә кәрәк. Башҡалар араһында баланды кәм-хур итмәй йөрөткөң килә. Әгәр ҙә ул кәмһенә икән, унан ниндәй шәхес сығыуы мөмкин. Статистика билдәләүенсә, Рәсәй халҡының 60 процент самаһы ярлылар рәтендә ҡарала, 30 проценты - урта хәлле, 10 проценты - байҙар. Етемлектең, эскоммунизм төҙөйбөҙ", - тип энтузиазм менән йәшәүен дә яңылыш йәшәү тип атай алмайбыҙ. Кешене ылыҡтырырҙай, дәртләндерерҙәй ниндәйҙер идеяларҙың булыуы кәрәк. Әҙәбиәт ошондай идеяларҙы, ошондай рухты, үҙенең артынан башҡаларҙы әйҙәрҙәй шәхестәрҙе алғы планға сығарырға бурыслы.

Халҡыбыҙ "Урал батыр", "Аҡбуҙат" кеүек эпостарҙы ижад итә алған икән, уның Салауат, Аҡмулла, Бабич, Рәми кеүек улдары булған икән, уның рухы азат булған. Улар: "Мин бына шулай тип әйтһәм, етәкселәргә оҡшармы икән, миңә нимә булыр икән?" - тип уйламаған. "Мин - халыҡтың теле, тик халыҡ телен асырмы икән?" тигән Ҡарас сәсән. Ул үҙен халыҡ менән бер бөтөн итеп күрә. Халыҡ әйтергә теләгәнде сәсән әйтергә тейеш. Ә беҙҙә нисек килеп сыға? Беҙ күбебеҙ власть әйтергә теләгәнде әйтәбеҙ ҙә, шуның өсөн премия көтөп йөрөйбөҙ.

Кешегә инаныс кәрәк, уны иң-иң ҡотолғоһоҙ булып тойолған хәлдәрҙән дә яҡтылыҡҡа булған ышаныс, өмөт алып сыға. Ә беҙ халыҡтың ошондай өмөтөн һүндерә барабыҙҙыр

*Ҡайһы бер яҙыусылар сәйәсәттән алыҫ тороуҙы хуп күрә. Бындайҙар өсөн "Һин сәйәсәт менән шөғөлләнмәһәң, сәйәсәт һинең менән шөғөлләнәсәк", тигән билдәле әйтемде килтерергә була. Ошондай ҡатмарлы осорҙа әҙипмен тигән әҙип философ- сәйәсмән булараҡ сығыш яһарға тейеш. Быны транспарант күтәреп митингта йөрөү йә трибунанан сығыш яһау тип ябайлаштырып ҡарарға ярамай. Сәйәси тормош менән әҙиптең әҫәр геройҙары йәшәй ала. Хыял донъяһын, мөхәббәт иллюзияһы менән генә хушһынып булмай. Бөгөн милләтебеҙ алдына һорауҙар, проблемалар бөтөн ҡырҡыулығында ҡуйылған. Беҙ бөгөн сиккә килеп еткәнбеҙ икән, был хәлебеҙҙе аңларға кәрәк. Элекке һымаҡ йоҡомһорап йөрөһәк, әлбиттә, кеше булараҡ һаҡланып ҡалырбыҙ, әммә башҡорт булараҡ, рәсәйле булараҡ юҡҡа сығыуыбыҙ бик мөмкин.*

ҙың, нәфрәттең иң һуңғы сиккә етеүе һәм уның суҡмарға тотоноуы хаҡында яҙа. Рәсәй халҡы һәнәккә, суҡмарға тотоноп, Наполеондың: "Әйҙәгеҙ, тәртипле һуғышайыҡ!" - тип аҙарыныуҙарына ҡарамайынса дошманды дөмбәҫләгән...

▸ **"Һуңғы сик" тигәндә, Петр Проскуриндың шундай һүҙҙәре бар: "Һәр бер халыҡта тейелмәгән физик, рухи һәм психологик запас көс була һәм әгәр ҙә тарих ул халыҡты юғалыу сигенә ҡуйһа, ул көс хәрәкәткә килә...**

**Ф.Күзбәков:** Беҙ аңлы бәндәләр булараҡ, шул һуңғы сиккә етмәйенсә нимәлер эшләргә тейешбеҙ.

**Ғ. Хисамов:** Милләтте сиккә еткермәү мәсьәләләре шул уҡ әҙиптәргә: шағирҙарға, прозаиктарға, драматургтарға ҡағыла. Дөйөм әҙәбиәт кимәле төшкән икән, барлыҡ әҙиптәрҙе туплап, рух үҙәге булырлыҡ көс бармы һәм мөмкинме был, тигән һорау ҡуйырға кәрәк.

**Ф.Күзбәков:** Бына ошонда беҙҙең әҙиптәр ҡыйыулыҡ, тәүәккәллек һәм гражданлыҡ әүҙемлеге күрһәтергә бурыслы. Бөтөн Рәсәй кимәлендә тормош беҙҙе милли идеология, милли сәйәсәт хаҡында уйланырға мәжбүр итә. Насармы-яҡшымы, беҙ әрләргә яратҡан совет осоронда милли мәсьәләләр хәл ителә килде. Әлбиттә, бында уның хәл ителеү кимәле хаҡында һүҙ бармай. Бөгөн власть органдарына был йәһәттән сәйәси ихтыяр талап ителә, әҙиптәр ҙә сәйәсәттән алыҫ тора алмай был осраҡта. Ҡайһы бер яҙыусылар сәйәсәттән алыҫ тороуҙы хуп күрә. Бындайҙар өсөн "Һин сәйә-

# ҺҮҘ ӘЙТЕҮҘӘН,

## әгәр һуңлаһа?

сәт менән шөғөлләнмәһән, сәйәсәт һинең менән шөғөлләнәсәк", тигән билдәле әйтемде килтерергә була. Ошондай ҡатмарлы осорҙа әҙипмен тигән әҙип философ- сәйәсмән булараҡ сығыш яһарға тейеш. Быны транспарант күтәреп митингта йөрөү йә трибунанан сығыш яһау тип ябайлаштырып ҡарарға ярамай. Сәйәси тормош менән әҙиптең әҫәр геройҙары йәшәй. Хыял донъяһы, мөхәббәт иллюзияһы менән генә хушһынып булмай. Бөгөн милләтебеҙ алдына һорауҙар, проблемалар бөтөн ҡырҡыулығында ҡуйылған. Беҙ бөгөн сиккә килеп еткәнбеҙ икән, был хәлебеҙҙе аңларға кәрәк. Элекке һымаҡ йәкомһорап йөрөһәк, әлбиттә, кеше булараҡ һаҡланып ҡалырбыҙ, әммә башҡорт булараҡ, рәсәйле булараҡ юҡҡа сығыуыбыҙ бик мөмкин. Беҙ әле үҙебеҙҙең хәлде аңларлыҡ хәлдә түгелбеҙ. Ябай кешенең бөгөнгө хәлен ҡайғыртып йәшәүе тәбиғи, ләкин беҙ, әҙиптәр, әлеге хәлебеҙҙе аңлап, киләсәгебеҙҙе ҡайғыртырға, хәстәрлек күрергә бурыслы. Шунһыҙ беҙ илаһи көстәр һалған бурысты үтәй алмаясаҡбыҙ.

**Әҙәбиәттең милләттең рухи үҙәге була алмауының төп сәбәбе тарихтан айырылыуыбыҙҙа түгелме икән? Ни генә тиһәк тә, беҙ халҡыбыҙ тарихының 10-15 процент самаһын ғына беләбеҙ. Шуға күрә лә беҙҙә Сыңғыҙ Айтматов һымаҡ тарих менән хәҙергене, киләсәкте тоташтырып, киң планлы роман яҙыусылар юҡтыр ҙа. Башҡорт ғәскәре хыянатсыл рәүештә ҡоралһыҙландырылып, Ленин автономиябыҙ хаҡындағы Килешеүҙе "ҡағыҙ киҫәге" тип атағандан һуң Әхмәтзәки Вәлиди сит илгә сығып китергә мәжбүр була. Уның был ваҡыттағы кисерештәрен күҙ алдына килтереүе лә ҡыйын. Әммә, ул "Башҡорт халҡына хушлашыу хаты"нда әйтеүенсә, рухи бөлгөнлөк хәленә төшмәй һәм был хәлен халҡыбыҙҙың тарихын яҡшы белеүе менән аңлата. Ошоларҙан сығып, хәҙерге башҡорт яҙыусыһы халҡыбыҙҙың тарихын өҫтән-мөҫтән генә белә икән, уға рухи азатлыҡ дәғүәһен ҡуйып буламы?**

**Ф.Күзбәков:** Сыңғыҙ Айтматов халҡының рухи тамырҙары булған мифологияға таяныуы менән көслө. Ысынлап та, кешенең ата-бабаларының, халҡының тарихы рухы булып нығынған икән, ундай кешенең, ысынлап та, холҡон үҙгәртеп, рухын һындырып булмай. Бындай кеше көслө. Ләкин, ҡыҙғаныска ҡаршы, илебеҙҙең 70 йылдан ашыу ваҡыты эсендә халыҡтарҙы тарихтарынан айырыу буйынса байтаҡ эш эшләнде. Үҙ халҡының тарихын белмәгән кешене маңҡорт тиҙәр, ә халҡының тарихын белмәгән яҙыусы ла шул уҡ маңҡорт. Уның төп маҡсаты ла йылы урын эҙләүгә һәм премия юллауға ҡайтып ҡала. Ә ысын яҙыусы йә шағир халыҡтың рухи юлбашсыһы, сәсәне тип йөрөтөлә. Киреһенсә булған осраҡта - ул барыбер ҙә үҙен генә ҡайғыртыусы кеше.

Македонский үҙенең "сеймәлсек төйөндө" сисергә тейешлеген аңлағас, ул төйөндө өҙә сабыуҙы хуп күрә. Беҙгә лә тәүәккәллек күрһәтмәйенсә, ҡайһы бер мәсьәләләрҙе хәл итеү мөмкин түгел. Мин бында революцион сара кәрәк тип әйтмәйем, әммә тәүәккәллек күрһәтеү зарур. Бая әйткәнемсә, власть сәйәси ихтыяр күрһәтһә, беҙ, яҙыусылар, проблемаларҙы хәл итә алыр инек.

**Ғ. Хисамов:** Бында әле рухи азат булмаған яҙыусы йә ғәләм тибрәтергә тырышыусы кешене уйландырырлыҡ, рухын балҡытырлыҡ әҫәр тыуҙыра алмай, тигән фекер әйтелде. Шул фекерҙе дауам итеп, мәсьәләнең тағы ла бер генә яғын билдәләргә кәрәк ине: һәр бер ҡәләм тотҡан кеше, һәр союз ағзаһы бер төрлө йәшәп, икенсе төрлө яҙа аламы? Әйтәйек, ул бөйөклөк тураһында яҙа, ә үҙе түбән кеше. Көндәлек тормошта ул кешеләрҙе алдай, аҡсаһын талап ала...

**Ф.Күзбәков:** Был хәл булыуы бик мөмкин. Тап шуның өсөн дә бер төрлө уйлаусы, икенсе төрлө һөйләүселәр, өсөнсө төрлө эшләүселәр барлыҡҡа килде. Ҡыҙғаныска ҡаршы, шулай. Әлбиттә, әҙиптән беренсе сиратта һүҙ көтөлә. Әгәр ҙә әҙип үҙе яҙған идеалдарына тоғро ҡала икән, башҡаларға ул бына тигән өлгө. Әгәр ҙә инде ул халыҡ алдында бер төрлө сығыш яһап, осрашыуҙан һуң үҙенең әҫәрҙәренә ҡапма-ҡаршы холҡон күрһәтһә, ул үҙенен генә түгел, ғөмүмән, әҙәбиәттең бәҫен төшөрә. Халыҡ ундайҙарға ҡарап: "Был яҙыусылар барыһы ла бер сыбыҡтан ҡыуылған", - тип фекер йөрөтә башлай. Яҙыусылыҡтың халыҡ алдында бәҫе төшөүендә лә беҙ үҙебеҙ ғәйепле.

**Ғ. Хисамов:** Үпкәләштән булмаһын, мин Фәнилгә бер һорау бирәм: бына Фәнил Күзбәков тураһында төрлө хәбәр йөрөй. Имеш, ул ярамаған эш эшләгән. Ниндәй эш һәм был хәбәр дөрөҫлөккә тура киләме-юҡмы?

**Ф.Күзбәков:** Үҙеңдең дөйә түгеллегеңде иҫбатлау һымаҡ килеп сыға инде бында. Үкенескә ҡаршы, беҙҙә кеше тураһында тегендә-бында ишеткән хәбәрҙәр буйынса ғына фекер йөрөтөү башланды. Күп һыналған иң дөрөҫ юл - кеше хаҡында уның эштәре буйынса фекер йөрөтөү. Эйе, миңә Башҡортостан мәғарифын үҫтереү институтынан китергә тура килде. Институтты мин 5 йылға яҡын етәкләнем. 4 йыл эшләгәс, өҫтәгеләр миңә эштән китергә тура киләсәген аңғарттылар. Сәбәбен һораным. Конкурстарҙа еңеүселәрҙе билдәләү, уҡытыусыларға грант биреү, Берҙәм дәүләт имтихандары һөҙөмтәләренә ишаралап, бындай "сетерекле" мәсьәләләрҙе хәл итеүҙә һинең менән уртаҡ тел табыуы ҡыйын, тинеләр. Мин улар һалған исемлектәр менән эшләй алмай инем шул... Аҙаҡ баҫым көсәйә төштө: "Һиңә күпме әйтергә мөмкин - кеше көтөп йөрөй, урын кәрәк!" 2009 йылда беҙҙең институт аккредитация үтергә тейеш ине. Абруйлы комиссия ике аҙна буйына тикшереп, эшебеҙҙе юғары баһаланы, әммә комиссия рәйесе, башҡаларҙың фекерен инҡар итеп, үҙенсә һығымта яһап ҡуйҙы. Институтҡа юғары уҡыу йорттарына ҡуйыла торған дәғүә белдерелде. Мин параллель рәүештә эксперт буйынса бойондороҡһоҙ комиссияға мөрәжәғәт иттем. Уларға барлыҡ документтарҙы ебәрҙем һәм ыңғай яуап алдым. Шулай итеп, комиссия миңә лицензияны бирергә мәжбүр булды. Тегеләр барыбер өҫтән төшмәне. Бирешмәскә тырыштым. Шунан һуң улар миңә: "Беҙҙең бит рычагтар төрлөсә", - тип, шул уҡ системала эшләп йөрөүсе ҡатыныма ишараланылар. Икебеҙ ҙә бергә эштән китһәк, нишләргә? Балалар бар. Өсәү - башҡорт ғаиләһенә кәм тигәндә өсәү кәрәк, йәнәһе... Китергә тура килде, әммә ғариза яҙманым /башҡортлоҡтандыр инде/. Ул саҡ больничныйҙа инем, шулай ҙа бойороҡ сығарҙылар. Дәғүәләшеп йөрөүҙең мәғәнәһе юҡлығы һуҡырға ла асыҡ булғанға, ҡул һелтәнем. Дүрт айға яҡын эшһеҙ. Журналистика буйынса республикала берҙән-бер фән докторы! Ғүмерем буйы мәғарифта эшләгәнмен... Урамда ҡалдым... Әмир Әминевҡа сикһеҙ рәхмәтлемен: ҡыйыулыҡ күрһәтте, был ярҙамы өсөн үҙенә эләгеү мөмкинлеген белә-күрә эшкә алды...

**Ғ. Хисамов:** Тап шул мәлдә, күрәһең, һинең турала башҡа төрлө һүҙҙәр тараттылар. Кем эшләй быларҙы? Бының менән нимәгә өлгәшергә теләй һуң улар?

**Ф.Күзбәков:** Ул һүҙҙәр мине эштән ебәрергә йөрөгән осорҙа таратылды. Минең тура һүҙле булыуым күптәргә бөгөн дә оҡшамай. Йыш ҡына "Кем булһа ла быны әйтергә тейеш бит", тип хәҡиҡәткә тартып күрһәтәм. Әлбиттә, был күптәргә оҡшап етмәй һәм бының өсөн яуап бирергә тура килә. Ҡыҙғаныска ҡаршы, беҙ, хәҡиҡәтте асыҡлап, тулышып шартлар хәлгә етешкән проблемаларҙы хәл итеү юлдарын эҙләйһе, эш эшләйһе урында хатта асыҡтан-асыҡ һөйләшеүҙән ҡурҡабыҙ. Сөнки кемгәлер бының кәрәге юҡ. Тәү сиратта йылы урынға оялап алғандарға кәрәге юҡ. Ә был эшем эйәһе биләгән вазифа аша хәл ителергә тейешле мәсьәләләр шул көйөнсә ҡала килә.



**Хәҡиҡәтте әйтеп биреүсе шәхестәр кәрәкмәйме ни беҙҙең йәмғиәткә, дәүләткә?**

**Ф.Күзбәков:** Әгәр ҙә хөкүмәт, власть йәмғиәтте алға ебәрә торған хәҡиҡәткә, идеологияға мохтаж булһа, уларға шундай шәхестәр һәм әҙиптәр кәрәк буласаҡ. Тимәк, власть бындай әҙәбиәткә мохтажлыҡ кисермәй, ҡыҙғаныска ҡаршы, улар әҙәбиәттең ролен аңлап бөтмәй, минеңсә.

**Ғ. Хисамов:** КПСС заманында "алтын ситлек" тигән йәшәү рәүеше бар ине. Йәғни алтын ситлек эсендә һандуғастар һайрап тора, әммә улар ситлектә йәшәй. Алтын булһа ла, улар барыбер ситлек эсендә. Ситлек эсендәге һандуғастар һайрап торһон өсөн уларҙы ваҡытында ашатып торалар ине. Килде заман, 90-сы йылдарҙың башы етте. Ситлекте астылар, ирек даулаған һәм дауламаған һандуғастар барыһы ла осоп сығып бөттө. Хәҙер һандуғастар һайрамай, сөнки ем биреүсе юҡ. Власҡа үҙ һүҙен әйтеүсе әҙиптең кәрәкмәүе ошо миҫалда күренә лә инде ул. Бөгөнгө һандуғастар емде таба, шул уҡ исемдәрҙе, премияларҙы алалар. Йәғни власҡа кәрәкле һандуғас - уның йырын йырлаусы һандуғас. Бөгөн Башҡортостан яҙыусылары союзының 220 ағзаһы араһында ысын һандуғастар бармы икән?

**Яҙыусы менән милләт араһын нисек яҡынайтырға, яҙыусының бөгөнгө урыны китап биттәренә ҡарағанда халҡы менән аралашыуҙа мөһимерәк түгелме?**

**Ф.Күзбәков:** Ғәлим Афзал улы был турала бер ни тиклем әйтеп үтте. Яҙыусы үҙенең әҫәрҙәрендәге идеяларға тоғро булырға, ниндәй генә һорауҙар ҡуйылһа ла, уларға яуап бирә алырлыҡ кимәлдә булырға тейеш. Уның баһаһы халыҡтың рухи юғарылығындағы баһа булараҡ ҡабул ителһә, халыҡ әҙибенең артынан эйәрһә генә ысын яҙыусы һүҙе була ала. Тик шул саҡта ғына яҙыусы менән милләт араһындағы упҡын юғала башлай. Беҙ һүҙҙең баһаһын шул тиклем төшөргәнбеҙ, һөҙөмтәһе - халыҡ әҙип һүҙенә ышанмай. Халыҡ хәҙер үҙ йүнен үҙе күрә һәм уның өсөн бер кем дә бер нәмә лә эшләмәйәсәген аңлау дәрәжәһенә еткән. Үҙ йүнендә үҙең күрергә ынтылыу яҡшы, сөнки рух азатлығы тап ошо хәлгә бәйле. Әгәр ҙә кемдер икенсе берәүгә барып инәлә йә яллап эшләй икән, ул барыбер ҙә рухи яҡтан азат була алмай.

Бөгөн әҙиптең йәнле һүҙе китапҡа ҡарағанда ла кәрәгерәк. Яҙыусы иң тәүҙә уҡыусыһын әҙиптең һүҙе кәрәклегенә инандырырға тейеш. Шунан һуң ғына беҙ китапҡа әйләнеп ҡайта аласаҡбыҙ.

**Ғ. Хисамов:** Дөрөҫ. Шуға бер миҫал: һуңғы көндәрҙә Японияла оло фажиғә. Меңәрләгән ҡорбан, ауыл-ҡалалар емерелә, һыу аҫтында ҡала. Башҡорт яҙыусыларынан кем ошо фажиғәгә үҙ мөнәсәбәтен белдерергә сығыш яһаны? Юҡ, ошонан аҙаҡ беҙ кем һуң?

**Ф.Күзбәков:** Кешемен тигән кеше иң тәүҙә үҙен, ғаиләһен, артабан, ҡулынан килһә, милләтен, илен ҡайғырта. Донъя кимәлендә фекерләй алған әҙип, әлбиттә, бындай ваҡиғаға тыныс ҡарай алмай. Үткән быуаттың 60-сы йылдарында, мәҫәлән, Абдулхаҡ Игебаев "Оран һала Ер-Әсә" тип, саң һуҡты. Бармы бөгөн беҙҙең ошондай кимәлдә йөрәктәргә үтеп инмәле әйтә алырҙай шағир? Ә әйтһә, ишетә алырлыҡмы халыҡ? Өҙә генә ыңғай яуаплауы ла ҡыйын. Конъюнктур әҫәрҙәр бар ул. Уларҙы сәхнә аша ла яңғыраталар, шаулаталар. "Аптырағандың көнөнән" әҙәби тәнҡит менән шөғөлләнеүселәр уларҙы күккә лә күтәрә. Ә халыҡ быларҙың барыһына ла битараф. Уйланғандары иһә, көрһөнөп кенә ҡуя...

(Дауамы 10-сы биттә).

***Бөгөн халыҡ шағирҙары һәм яҙыусылары шул тиклем күбәйҙе, уларҙың хатта исемен теҙеп һанау ғына түгел, кемдәр икәнен иҫтә ҡалдырып та булмай. Әҫәрҙәре тураһында әйтеп торорға ла түгел. Башлап яҙышҡан дәүерҙә (был осор 40-50 йәшкә тиклем дә булғылай) рифма, ритм тура килгән бер шәлкем шиғыр, арлы-бирле хикәйә яҙҙы ниһә, "был ҡәләм өмөтлө күренә", тип китабын сығарыу өсөн йүгереше башлайбыҙ. Ике-өс китабы донъя күрһә, автор "билдәле" шағирға йә яҙыусыға әүерелә. Тағы ла бер-икеүһе баҫылһа, премия юллау хәстәре ҡалҡа. Йәнә бер-ике китаптан һуң Салауат премияһын биреп, халыҡ яҙыусыһы йә шағиры исемен таға һалып, "бөйөк" яһайбыҙ. Тик бар китаптарын йыйып, ныҡлабыраҡ һелкһәң, рух үҙәге түгел, әҫәр атамаһына лайыҡ булырлыҡ та нәмә ҡалмай. Бына ошондай хәлдә бөгөн беҙҙең әҙәбиәт.***

✓ *Әгәр ҙә союз ағзаһы ике йыл буйына ижад итмәне, бер нәмә лә яҙманы икән, уны союздан сығарырға кәрәк. Минең әле бер генә кешене лә союздан сығарғандарын күргәнем булманы.*



**Башы 8-9-сы биттәрҙә.**

▸ **Бер халыҡ йырсыһы: "Бына беҙ сәхнәгә сығып йырлайбыҙ, нимәгәлер өлгәшәбеҙ, исемдәр яулайбыҙ. Ә бит ысын халыҡ йырсылары халыҡ араһында ҡалды. Беҙ бары үҙебеҙҙең тырышлыҡ, әрһеҙлек арҡаһында ғына күтәрелдек..." - тип тетрәндерерлек фекер әйткәйне. Кем белә, бәлки, ысын шағир, ысын яҙыусы халыҡ араһындалыр ҙа, беҙ ҙә үҙебеҙҙең әрһеҙлек арҡаһында ғына уларҙың урынын яулағанбыҙҙыр. Шулай түгелме? Икенсенән, әҙәбиәт күптәр өсөн йәшәү сығанағын тәьмин итеүсе "тағараҡ" ролен генә үтәй. Үҙенен инанысы, йәшәү рәүеше буйынса ысынлап та әҙип булғандар күп түгел. Әйтәйек, шундайҙарҙың икәүһе Ноғман Мусин менән Рәшит Шәкүр.**

**Ф.Күзбәков:** Беҙҙең яҙыусылар араһында үҙҙәренең ижады хаҡындағы объектив фекерҙе ҡабул итеү генә түгел, ишетергә теләмәүселәр, үҙҙәрен әҙәби тәнҡиттән өҫтөн тип иҫәпләүселәр ҙә бар. Миңә, тәнҡитсе булараҡ, бер исемле-премиялы иптәшкә әҫәре буйынса бер-ике һөйләм менән генә тәнҡит һүҙҙәре әйтергә тура килде. Миңә хәҙер ул бүре һымаҡ ҡарап йөрөй. Был беҙҙең мәҙәни кимәлебеҙ хаҡында һөйләй. Ә мин уның ижадына тулайым баһа бирмәнем бит. Ул сағында ул: "Һин нишләп минең ижадҡа ревизия үткәрәһең?" - тип дәғүә белдерә алыр ине. Тимәк, алдағы яҙыусылар йыйынында ниндәйҙер айырым төркөмдөң мәнфәғәтен күҙәткән ҡараш өҫтөн ҡуйыла икән, яңынан 5 йылға әҙәбиәт үҫеше тотҡарланыуы ихтимал.

*Беҙҙең яҙыусылар араһында үҙҙәренең ижады хаҡындағы объектив фекерҙе ҡабул итеү генә түгел, ишетергә теләмәүселәр, үҙҙәрен әҙәби тәнҡиттән өҫтөн тип иҫәпләүселәр ҙә бар. Миңә, тәнҡитсе булараҡ, бер исемле-премиялы иптәшкә әҫәре буйынса бер-ике һөйләм менән генә тәнҡит һүҙҙәре әйтергә тура килде. Миңә хәҙер ул бүре һымаҡ ҡарап йөрөй. Был беҙҙең мәҙәни кимәлебеҙ хаҡында һөйләй. Ә мин уның ижадына тулайым баһа бирмәнем бит. Ул сағында ул: "Һин нишләп минең ижадҡа ревизия үткәрәһең?" - тип дәғүә белдерә алыр ине. Тимәк, алдағы яҙыусылар йыйынында ниндәйҙер айырым төркөмдөң мәнфәғәтен күҙәткән ҡараш өҫтөн ҡуйыла икән, яңынан 5 йылға әҙәбиәт үҫеше тотҡарланыуы ихтимал.*

▸ **Юғары техник белемле башҡорт зыялыларының ҡайһы берҙәре башҡорт әҙәбиәтен уҡый алмауҙарын уның ҡыҙыҡ булмауына бәйләп аңлата. Был дәғүә урынлымы, ғөмүмән, әгәр ҙә яҙыусы интеллектуаль кимәле буйынса уҡыусыһынан түбән булыуы мөмкинме, ул яҙыусымы?**

**Ф.Күзбәков:** Был фекерҙә, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, дөрөҫлөк бар. Беҙҙең әлеге лә баяғы премияға эйә булыусылар үҙҙәрен Алланың "ҡашҡа тәкәһе" тип иҫәпләй. Шунан башлана: "Мин уҡымаһам да, барыһын да беләм, миңә белеү кәрәкмәй..." Һөҙөмтәлә ундай яҙыусы уҡыусыһынан наҙан булып сыға. Донъя, классик әҙәбиәтте генә түгел, хәҙерге союз ағзаһы булған яҙыусы ҡәләмдәштәренең дә әҫәрҙәрен уҡымай. Насармы-яҡшымы, әҙәбиәтте белергә кәрәк. Яҡшы әҫәр яҙыр өсөн хатта уның насар яҙылғандарын белергә кәрәк. "Беҙҙең яҙыусыларҙың кимәле уҡыусыларҙыҡынан түбән", - тип әйтә торғайны Рәшит ағай Солтангәрәев. Бына беҙ XXI быуатҡа аяҡ баҫтыҡ һәм был хәл бөгөн дә үҙгәрешһеҙ ҡала килә. Техник белемле уҡыусыны ҡыҙыҡтырырлыҡ әҙәби әҫәрҙәр бөтөнләй юҡ тип әйтмәҫ инем, бар улар, уларҙы күрһәтер өсөн әҙәби тәнҡиттең ролен күтәрергә кәрәк. Әҙәби тәнҡит - ул күҙлек. Ҡайһы берәүҙәрҙең күҙе насар күрә, кемдер яҡындан, кемдер алыҫтан күрә. Шуның кеүек, әҙәби тәнҡит бындай осраҡта уҡыусыға булғанды күрһәтә. Ә инде тома һуҡырға күҙлектең бөтөнләй кәрәге юҡ.

**Ғ. Хисамов:** Яҙыусы әгәр ҙә үҙенең уҡыусыһынан түбән кимәлдә икән, быға яҙыусы үҙе ғәйепле. Ундай яҙыусы әҙәби әҫәр генә түгел, хатта көндәлек гәзит тә уҡымай. Шуға күрә беҙ Яҙыусылар союзы булғаны өсөн генә ул кешене яҙыусы тип атарға хаҡыбыҙ юҡ. Ул союз ағзаһы ғына. Икенсе яҡтан, был йәмәғәтселек ойошмаһында тормаған ижадсының да бына тигән яҙыусы булыуы бар. Яҙыусы, ысынлап та, Алланың "ҡашҡа тәкәһе"ул. Ул тап шулай булырға тейеш.

**Ф.Күзбәков:** Дөйөм массала талантлылар юғалыңҡырап ҡала. Ә тәнҡит ошо дөйөм массала юғалып ҡалғанды күрһәтә белергә, кемдең кем икәнен әйтергә тейеш. Сөнки бөтә уҡыусы ла уҡыусы талантына эйә түгел.

**Ғ. Хисамов:** Икенсе төрлө әйткәндә, тәнҡит яҙыусыны союз ағзаһынан айырып күрһәтә белергә тейеш.

**Ф.Күзбәков:** Урманда һандуғасы ла, тутыйғошо ла, сәпсеге лә, сыйырсығы ла, ҡарғаһы ла бар. Уларҙың һәр ҡайһыһының тәбиғәттә алыштырғыһыҙ үҙ урыны бар бит. Тик һәр күреневште, һәр йән эйәһен үҙ исеме менән атар кәрәк. Һарыҡ тиреһен ябыныу менән генә бүре һарыҡ булып китмәй. Уға был тире һарыҡтарҙы тамаҡлап сығыу өсөн генә кәрәк.

▸ **Уҡытыусыларға аттестация үткәрәләр, ә ниңә йәмәғәтселек ойошмаһында торған яҙыусыға ла ошондай һынау үткәрмәҫкә. Совет осоронда ижади отчеттар булған бит.**

**Ф.Күзбәков:** Уҡыусы хөкөмө, ваҡыт иләге төшөнсәләре бындай "аттестацияны" барыбер үткәрә бит. Ләкин барыһын да ваҡыт иләгенә генә ҡайтарып ҡалдырырға ярамайҙыр. Бигерәк тә йәш ижадсыға ваҡытында баһа кәрәк. Ижад кешеһен мәлендә күтәрмәләп, арҡаһынан һөйөп кенә ебәреү ҙә етә. Ләкин шаштырырға ярамай. Яҙыусыларҙың да үҙ "генералдары", "полковниктары", ябай һалдаттары бар. Юғары чинлылар йәштәрҙе мәлендә күтәрмәләп ебәрә белергә тейештер ул.

**Ғ. Хисамов:** Диалектика буйынса "инеү" булғас, "сығыу" ҙа булырға тейеш. Шуға күрә бер тәҡдим: Яҙыусылар союзы кемделер ағзалыҡҡа ала икән, уның сығарыу тигән механизмы ла эшләргә тейеш. Әгәр ҙә союз ағзаһы ике йыл буйына ижад итмәне, бер нәмә лә яҙманы икән, уны союздан сығарырға кәрәк. Минең әле бер генә кешене лә союздан сығарғандарын күргәнем булманы.

▸ **Яҙыусылыҡ кешегә тәбиғәт тарафынан һалынған, Хоҙай тарафынан бирелгән ниндәйҙер һәләтте, ғөмүмән, шәхестең үҙ-үҙен бойомға ашырыу юлы ла. Шуға күрә кешенең күпләп ижадҡа ынтылыуын хупларға ғына кәрәктер. Әммә ҡайһы берәүҙәр өсөн ижад йәшәү сығанағын тәьмин итеүсе "тағараҡ" ролен дә үтәй. Һәр хәлдә, совет осоронда был хәл мөмкин ине. Тимәк, гонорар өсөн яҙыу бер яҡтан ҡарағанда яҙыусыға стимул да, икенсе яҡтан ҡарағанда үҙмаҡсат та. Әлеге ваҡытта электрон китаптар киң таралыу ала башланы, йәғни яҙыусының уҡыусыға барып етеү мөмкинлеге арта, бер үк ваҡытта матди стимул кәмей төшә. Был хәл үҙе үк әҙәбиәтте талантһыҙҙарҙан таҙартыр ине. Шулай түгелме?**

**Ғ. Хисамов:** Бер съезда проза секцияһы бара ине. Тәүҙә секция рәйесе үҙенең телмәрен тотто, һуңынан фекер алышыуҙар китте. Унда сығыш яһаусыларҙың күбеһе китаптарының оҙаҡ ваҡыт баҫылмауы хаҡында зарланды. Мин торҙом да: "Яҙған әҫәреңде донъяға күрһәтер өсөн китап рәүешендә генә сығарыу мотлаҡ түгел. Әгәр ҙә уны электрон формаһында сығарһаң да, ул барыбер донъяға сыҡҡан булып иҫәпләнә",- тинем. Шулай әйтеүем булды, бер яҙыусы: "Электрон китап өсөн гонорар түләнәме һуң?" - тигән һорауҙы биреп өлгөрҙө. Был нимә тураһында һөйләй: әгәр ҙә гонорар түләнмәһә, яҙырға теләүселәр ҙә булмаясаҡ.

**Ф.Күзбәков:** Электрон китаптар сығарыу менән генә мәсьәләне хәл итеп булмаясаҡ, миңеңсә. Сөнки графомандар электрон китаптарҙы былай ҙа күпләп сығара. Был мөмкинлек артыу менән төсһөҙ масса иҫ киткес күбәйҙе. Уларҙы билдәләүсе, яҡшыларын айырып күрһәтеүсе критерийҙар ҙа юғала. Икенсенән, беҙҙең әле электрон китаптарҙы уҡып баһа бирерлек мөмкинлегебеҙ бик самалы. Ваҡыт йәһәтенән генә лә. Донъя күргән китаптар хаҡында ла үҙ мәлендә фекер ишетелмәй ҡала.

▸ **Азат Абдуллиндың "Талантлылыҡ - кеше фажиғәһе, талантһыҙлыҡ - йәмғиәт фажиғәһе" тигән киң мәғәнәле һүҙҙәрен хәҙерге көнгә бәйләп нисек аңлатырға була?**

**Ф.Күзбәков:** Ысынлап та, парадоксаль фекер. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бында нимәлер эшләүе лә мөмкин түгел. Бында Яҙыусылар союзы принципиаллек күрһәтергә бурыслы. Ул бит дәүләт тарафынан бирелгән мөмкинлектәрҙе, ябайлаштырып әйткәндә, өләшеп ултырыусы. Беҙ булған әҙ-мәҙ мөмкинлектәрҙе лә тейешенсә, ғәҙел файҙалана алмайбыҙ. Үҙенең әҫәренә тейешле баһа ала алмаған ижадсы рәнйей һәм яңы әҫәргә уның ҡулы күтәрелмәй башлай.

**Ғ. Хисамов:** Беҙ әле асылда "Ниңә әҙәбиәт милләттең рух үҙәгенә әүерелә алмай?" тигән һорауға яуап эҙләйбеҙ. Икенсе бер һөйләшеүҙә "Беҙҙең әҙәбиәт шул кимәлгә үҫте, сәбәбе нимәлә?" тип һөйләшеп ултырырға яҙһын ине.

**Ф.Күзбәков:** "Ни мәғәнә дөрөҫ һүҙ әйтеүҙән, дөрөҫ һүҙең әгәр һуңлаһа?" тигән Рәми ағай. Әҙиптең һүҙе ваҡытында халҡына һәм ҡәләмдәштәренә барып етеүе мөһим. Ҡыҙыл йомортҡа көнөндә ҡиммәт.

Беҙ әҙәбиәт хаҡында һөйләшәбеҙ икән, дөйөм мәсьәләләрҙән тыш айырым яҙыусылар хаҡында ла һүҙ булырға тейештер. Хәҙерге әҙәбиәт хаҡында һүҙ йөрөткәндә мин өлкән быуын яҙыусыларына әллә ни ҡағылмаҫҡа тырышам. Беҙ өлкән быуынға хөрмәт менән ҡарайбыҙ, улар эшләгән, үҙҙәрен күрһәтә алған, әҫәрҙәре хаҡлы рәүештә дәреслектәргә, әҙәбиәт тарихына ингән. Ә бына хәҙерге көндә халыҡ кемдән яңы әҫәрҙәр көтә алыр ине? Мин ундайҙар араһынан иң беренсе булып шағир һәм прозаик Мәүлит Ямалетдиновты күрәм. Ул үҙ яҙмышы аша халҡыбыҙҙың яҙмышын күрһәтә. Факиһа Туғыҙбаева, Тамара Ғәниеваларҙан оло һүҙ көтә алабыҙ. Салауат Әбүзәр бик өмөтлө, потенциалын тулыһынса файҙаланһа, күп нәмә әйтә аласаҡ. Драматургияла үҙен һынап ҡарауы хуплауға лайыҡ. Айһылыу Ғарифуллинаны ҡыҙыҡһынып күҙәтеп барам. Ул яңы баҫҡысҡа күтәрелә барған һымаҡ. Был исемдәр шиғриәткә ҡағыла, бәлки, ҡайһы бер исемдәрҙе атамағанмындыр. Һәр хәлдә, мин юғарыла телгә алған шағирҙарҙың яңы һүҙ әйтә алырына ышанам.

Прозаға килгәндә, иң тәүҙә Талха Ғиниәтуллинды әйтер инем. Беҙ әле уға тулыһынса баһа бирмәгәнбеҙ, ә ул беҙҙең Рәсәй кимәлендәге прозаик. Шулай уҡ үҙенең проза әҫәрҙәре менән уйландырырға мәжбүр иткән Әмир Әминевты урап үтеүе мөмкин түгел. Уның һәр әҫәре көн ҡаҙығына һуға. "Бер кәмәлә" әҫәре үҙе генә ни тора. Гөлсирә Ғиззәтуллина әҫәрҙәрҙе психологик яҡтан нығына бара. Әхмәр Ғүмәр-Үтәбайҙың ҙур күләмле әҫәрҙәре күренеү өҫтөндә, ә бына сыҡҡан тиклеме үк ыңғай баһаға лайыҡ. Ул прозала үҙ һүҙен әйтәсәк әле. Фәрзәнә Аҡбулатова прозаһы уйсан әҙәбиәт өлгөһө. Уның көскә, быуынға ултырған мәле. Тура ултырып, ҡыйыш һөйләп булмай: Ғәлим Афзал улы, һеҙҙең, тарихты юллап, Заратуштраға тиклем барып етеүегеҙ, был хаҡта беҙҙең тарихҡа бәйләп фекер әйтеүегеҙ бик урынлы булды. Моғайын, киләсәктә был әҫәрегеҙ хаҡында һүҙ әйтеләр.

Драматургтарҙан Флорид Бүләков яңы һүҙ әйтеренә өмөт бар. Ул, моғайын, тулышып йөрөйҙөр. Наил Ғәйетбай иң әүҙем эшләгән драматург. Ул үҙенең әҫәрҙәрен яҙғанда, күбеһенсә, тамашасының донъя мәшәҡәттәрен онотоп, ял итеп ҡайтыуына ғына иҫәп тота һымаҡ. Был да насар түгел, әммә уның һәләте менән ижтимағи-философик әһәмиәткә эйә, һәлмәгерәк проблемалар күтәрелһә, әҙәбиәтебеҙ тағы ла байыр ине. Ә бындай мөмкинлек Наил Ғәйетбайҙа бар.

Дөйөм алғанда, һәр яҙыусыға ниндәйҙер баһа бирелергә тейеш. Әгәр ҙә ундай баһа бирелмәһә, дөйөм фондағы һоро массала беҙ булғандарын да юғалтабыҙ. Әҙәбиәткә, әҙәби тәнҡиткә үҙ асылын ҡайтарыу буйынса, ай-һай, күп эшләргә тура киләсәк. Мөһимдәрҙән-мөһиме: емде кәбәктән айыра беләйек! Дөйөм кимәлебеҙҙе күтәреү хаҡына!

▸ **Яҙыусыларҙың сираттағы йыйынына ниндәй уйҙар менән киләһегеҙ?**

**Ғ. Хисамов:** Юғарылағы әңгәмәлә әйтелгән уйҙар менән киләбеҙ.

**Ф.Күзбәков:** Бер яҡтан уйлағанда, ҡапма-ҡаршылыҡлы, икенсе яҡтан ҡарағанда, өмөтлө уйҙар менән киләм. Әгәр ҙә унда билдәле бер төркөмдөң генә мәнфәғәтен күҙәтеүсе фекер өҫтөнлөк алмаһа, барыһы ла яҡшы буласаҡ. Үҙенең тәғәйенләнеше, Хоҙай биргән һәләте менән республикабыҙҙы, Рәсәйҙе артабан үҫтерер көскә эйә идеялар генераторы, донъя кимәлендә Башҡортостандың визит карточкаһы булырлыҡ әҫәрҙәр ижад итә алған әҙиптәребеҙ бар беҙҙең. Союздың төп эшмәкәрлеген дә мин шундайҙарҙы ижадҡа рухландырыуҙа, уларҙың йәшәү, ижад итеү шарттарын яҡшыртыуҙа, әҙиптәрҙе халыҡ менән власты бәйләүсе, тәү сиратта халыҡ мәнфәғәтен яҡлаусы итеп ҡарауында күрәм. Әҙип халыҡтың намыҫ көҙгөһө, рухи ҡалҡаны булғанда ғына художестволы әҙәбиәт үҙ миссияһын тулыһынса атҡара аласаҡ. Һәм, әлбиттә, хөкүмәттең, бына ошоно аңларлыҡ кимәлдә булып, әҙиптәрҙе үҙ хәстәренән мәхрүм итмәүе мөһим.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Иң тәүҙә һүҙ булған", тип әйтелә дини китапта. Ошо уҡ мәғәнәне мәҙәниәт, сәнғәт даирәләренә бороп әйтһәк, "иң тәүҙә әҙәбиәт булған", тип тә әйтеп була. Әҙәбиәтһеҙ мәҙәниәттең дә, сәнғәттең дә, тимәк, милләттең дә киләсәге юҡ. Әҙәбиәтебеҙҙең киләсәген ҡайғыртыуҙың милләт киләсәген хәстәрләү икәнлеген дә белдерге килә. Тиҙҙән үтәсәк яҙыусылар йыйынына ошондай яуаплылыҡ менән килһәк ине.**



**Әңгәмәлә күтәрелгән мәсьәләләр буйынса яҙыусыларҙан һәм гәзит уҡыусыларҙан фекерҙәр көтәбеҙ.**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

ЙӘШЛЕК ЙӘШНӘҮҘӘРЕ

# ЭШ АРАҺЫНДА ЙҮГЕРЕҮ...

## спорт түгел инде

(Башы 1-се биттә).

### Команда уйындарын оҫта ойоштороу кәрәк

Үҙем ниндәй спорт төрөн өйрәнәм - шуны ҡыҙҙарға өйрәтә һалам. Мәҫәлән, "рус лаптаһы" уйынын тәүҙә үҙемә егеттәрҙән өйрәнергә, аҙаҡ ҡыҙҙарға өйрәтергә тура килде. Теләк көслө булғандыр инде... Ниндәй ҙә булһа берәй спорт төрө менән шөғөлләнер өсөн кеше ул уйындың нескәлектәрен күпмелер ваҡыт өйрәнергә тейеш. Теләге тормошҡа ашһын өсөн ҡайһы саҡта йүнәлеш бирер кәңәшсе лә кәрәк. Мин үҙем, мәҫәлән, ниндәй ҙә булһа спорт несәкәлектәрен өйрәтер алдынан ул кешене, әйтәйек, баланы ентекләп өйрәнеү яғындамын. Баланың тәбиғәте был спортты ҡабул итерме әллә юкмы? Спорт көсләп тағылыр йөк түгел. Ул үҙең теләп, ылығып, бар файҙаһын аңлап, ләззәт алып шөғөлләнер нәмә булырға тейеш. Шул теләкте уята белеү менән янған кешеләрҙе күрә белеү - яҡшы һөҙөмтәләргә килтерер һыҙат.

### Спорттың үҙ ҡыйынлыҡтары

Барыһы ла кешенең үҙенән тора. Айнур ағайым, мәҫәлән, футбол уйнап, ике тапҡыр аяғын һындырҙы. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, әле лә ярыштарҙа уйнай, мәктәптә үҙенең тел һәм әҙәбиәт дәрестәренән тыш, өҫтәмә рәүештә физкультура дәрестәрен дә алып бара. Йәрәхәт алыуы ундағы сәмде, дәртте һүрелдермәне. Спорт тырыштарҙы үҙенә мөкиббән иттерә, арбап ала. Шул уҡ ваҡытта башҡаларҙың быны аңламауы ла бар. Был - спорттағы тағы бер ауырлыҡ. Уһышлы ғына шөғөлләнеп китеү өсөн эргәтирәңде лә үҙеңдең йәшәү рәүешеңә өйрәтә алырлыҡ ныҡышмаллыҡ булыуы шарт. Шуһыҙ... Университетҡа уҡырға инеүемдең тәүге йылында енел атлетика, волейбол, лапта, баскетбол секцияларына яҙылдым. Лекциялар бөтһә, берәүһенә сығып йүгерәм. Ятаҡта бергә йәшәгән ҡыҙҙар өсөн был йәшәү рәүешем ҡыҙыҡ тойолдо. Улар йыш ҡына үҙҙәре менән магазиндар буйлап йөрөй алмауыма үпкәләй ине. Шулай ҙа күпмелер ваҡыт үтеүгә ярыштарға килеп, минең өсөн "яныпкөйөр" терәк-таянысыма әүерелделәр.

### Спорттың бар өлкәләрен үҙ итә

Каратэ менән дә ҡыҙыҡһынам мин. Уның серҙәренә төшөнөү - әлегә хыялда ғына. Ҡыҙҙарҙың каратэ менән шөғөлләнеүе бөгөн ят күренеш түгел. Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары элек тә ирҙәре менән атҡа менеп яу сапҡан... Миңә каратэла һуғышыу түгел, ә күмәк кешеләр менән бер сафҡа баҫып, күнегеүҙәр эшләү оҡшай. Хәрәкәттәре ылыҡтара. Икенсе курста ул секцияға бер аҙ йөрөп тә алғайным. Тик ваҡытымдың тығыҙ булыуы ғына ҡамасауланы. Башҡа эштәремә өлгөрә алмай башлағас, ҡалдырып торорға тура килде. Шулай ҙа ваҡыт юҡлыҡҡа зарланырға яратмайым: ниндәй генә ярышҡа саҡырһалар ҙа, йүгереп сығып китә торған холҡом бар.

Дартс менән дә ҡыҙыҡһынам. Университетта быйыл биология һәм география факультеттары һәм колледждар араһында үткән ярышта беренсе урын алдым. Ниндәй генә ярыштар үтһә лә, ҙур теләк менән ҡатнашам.

Бәләкәй саҡта ауылда малайҙар менән футбол уйнарға әүәҫ инем. Әле ҡыҙҙар араһында мини-футбол командаһы ойоштороп, был ярышты ҡыҙҙар араһында популярлаштырырға теләйем.

### Тағы бик күп өлкәләрҙә әүҙем ул

Башҡортостан тәбиғәте менән ҡыҙыҡһынам, әммә киләсәге өсөн борсолам. Тауҙарға, урмандарға, йылғаҡулдарға походтарға, экспедицияларға йөрөргә ратам. Һайлаған һөнәрем буйынса эколог булыуым да шуға ишара. Шулай уҡ баҡса үҫтереү күнелемә яҡын. Быйылдан "Ландшафтты проектлау һәм фито-дизайн" курстарына йөрөй башланым, декабрь айында диплом аласаҡмын. Был йүнәлеш буйынса белем алыу - минең маҡсатым ине. Тик Өфөлә ундай факультеттың көндөҙгө бүлеге булмауы әсендерҙе. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, башланғыс синыфтарҙан уҡ ҡыҙыҡһынған баҡсасылыҡ буйынса өҫтәмә белем алыуға өлгәштем. Минең баҡсасылыҡ менән ныҡлап ҡыҙыҡһыныпкитеүемә олатайым йоғонто яһағандыр. Уның баҡсаһы емеш-еләктәргә бай ине. Үҙебеҙҙең яҡта үҫкән емештәрҙе генә түгел, йылы яҡтарҙы үҙ иткәндәрен дә үҫтергәнем бар. Бының өсөн махсус теплицаларҙы ла үҙем эшләйем. Үҫемлектәрҙән иттибарҙы йәлләргә ярамай. Улар менән һөйләшергә, уларға ныҡлыҡ теләргә кәрәк. Баҡсасы иң тәүҙә ижадсы булырға, хисен, бар булмышын баҡсаһына арнарға тейеш ул.

Шулай уҡ атта сабырға ратам. Олатайым өс йәшемдә йүгәнһеҙ атҡа мендергән, аҡыллы ат мине урам эсендә алып йөрөгән, тиҙәр. Атайымдың аты юғалыуға бик күп ваҡыт үтеп китһә лә, һыбай йөрөүҙе онота алмайым.

### Сәләмәт йәшәүҙең сере

Күп нәмә тәрбиәнән тора. Мине, мәҫәлән, дөрөҫ тәрбиәләгәндәр тип әйтә алам. Сәләмәт йәшәү өсөн спорт менән дуҫ булырға кәрәклеген күнелемә һеңдергәндәр. Шулай уҡ атаәсәйем алама ғәҙәттәрҙең кеше һаулығына зыяндан башҡа файҙаһы юҡлығын төшөндөргән. Минеңсә, кешенең кем булыуы уның ниндәй тәрбиә алыуына туранан-тура бәйле. Үҫмерҙән ун биш йәштән алып егерме өс йәшенә тиклем ваҡытын алама ғәҙәттәрһеҙ үткәреүенә ярҙам итергә тейешбеҙ. Бының өсөн бары тик ысын күнелдән һөйләшергә кәрәк. Зыянын дәлилләүсе миҫалдар күрһәтеү ҙә файҙалы. Мәҫәлән, бөгөн төрлө тикшеренеүҙәр һөҙөмтәләре халыҡҡа еткерелә икән, уларҙы ла уңышлы файҙаланырға мөмкин. Кәңәшкә уғата мохтаж булған сабый сағында йүнәлеш бирерлек һөйләшеүҙәр үткәргәндә, ҙурая төшкәс, ул кеше үҙе лә барыһын да



төшөнәсәк, тирә-яғын күҙәтеп, алама ғәҙәттәрҙең күңелһеҙ эҙемтәләргә килтереүен аңлаясаҡ һәм сәләмәтлеген һаҡлап ҡаласаҡ.

Кеше организмы төрлө ауырыуҙарға ҡаршы көрәшә ала. Иммунитет - организмдың ауырыуҙан һаҡланыу системаһы. Тик алкоголь, тәмәке һәм башҡа шуның һымаҡ наркотик матдәләргә иммунитет ҡаршы тора белмәй. Тәбиғәт тарафынан беҙгә ундай һәләт бирелмәгән. Иң ҡурҡыныс шул: ғаиләлә алама ғәҙәтле бер генә кеше ҡалғандарҙың ғүмерен "ағыулай". Ғаилә ағзалары менән "русская рулетка" уйыны уйнай ул. Үҙенең дә, ғаиләһенең дә ғүмерен, һаулығын оло хәүеф аҫтына ҡуя.

### Спорт һинең өсөн нимә?

Теләһә ниндәй спорт ярышының кемдеңдер өҫтөнөрәк сығыуын билдәләү маҡсаты була. Көнкүрештә гигиена ҡағиҙәләрен тотоу һәр кешегә ни тиклем кәрәк булһа, минең өсөн хәрәкәтләнеү, спорт менән шөғөлләнеү ҙә шулай уҡ кәрәк. Бәлки, гигиенанан да мөһимерәктер.

Эш ваҡытындағы йүгереүҙе йә башҡа төрлө көс сарыф итеүҙе спортҡа индерергә ярамай. "Спорт менән махсус, аңлы рәүештә шөғөлләнергә кәрәк", - ти атайым да. Спорт менән шөғөлләнер өсөн әҙерлек талап ителә. Спортҡа аяҡ баҫыу - ниндәйҙер бүлмәгә тупһа аша атлап инеү ише генә түгел. Ул һәр ваҡыт эҙләнеү, һәр ваҡыт хәрәкәт итеү. Бөгөн зәңгәр экрандарҙан импульстар ярҙамында мускулдарҙы үҫтерә торған "серле билбауҙар" рекламалайҙар. Йәнәһе, көс арттырыуҙың еңел юлын тәҡдим итәләр. "Хәҙер ыҙалап тренажер залдарына йөрөргә кәрәкмәй - дивандарығыҙҙа ял итеп кенә ята бирегеҙ", - тигән фекер һеңдерергә тырышалар. Минеңсә, тик ултырып ҡына спортсы булып булмай. Бының өсөн теләк, дәрт кәрәк. Хәрәкәт итеү стрестарҙан арындыра, ти ғалимдар. Спорт - ғүмерем буйына оҙатып барыр нәмә. Бик теләһәм дә, спорттан баш тарта алмаҫ инем. Сөнки ул минең ҡаныма һеңгән, холҡома әүерелгән.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Халҡыбыҙ ауыҙ-тел ижадының аҫыл бер үрнәге булған "Алдар менән Зөһрә" дастанында нәзәкәтле лә, шул уҡ ваҡытта батыр ҙа ҡыҙ - Зөһрә тураһында бәйән ителә. Ул бала сағынан атта саба, тәүҙә атаһы менән, аҙаҡ бер үҙе һунарға йөрөй, Ирәндек буйында бер үҙе малтыуар аҫрап, малын ҡош-ҡортҡа тейгеҙҙермәй ирәүәнләнеп донъя көтә. Бөгөнгө ҡунағыбыҙ Лилиә Әминевала "Зөһрә" образын танығанһығыҙҙыр...**

Илгиз РӘХИМОВ яҙып алды.

КИТАБЕННАС

## ӨС ЙӨҘ ҘӘ ӨС ХӘҘИС

**Раuил БИКБАЕВ, Башҡортостандың халыҡ шағиры.**

108
Һәр диндең үҙ талаптары,
Баһа - ҡылығы.
Исламдың иң төп сифаты -
Баҫалҡылығы.

109
Күршеһенең асыҡҡанын күрә тороп,
Ниндәй мөьмин йәйрәп ҡәйеф-сафа ҡорор?

110
Кескәй гонаһ оло ҡая таштай
Күренәсәк мөьмин кешегә.
Үҙе ҡурҡыр: гонаһы тау булып
Бына-бына өҫкә ишелә.

111
Ҡарап торһа ир бары үҙ ҡатынына,
Үҙ иренә генә ҡарап торһа ҡатын,
Аллаһынан был икәүгә бәхет яуыр,
Шәфҡәт менән ҡарап һаҡлар, тиң яратыр.

Ҡатынының ҡулын тотһа ир-азамат,
Йорттарының артыр шул саҡ ҡот-өмөтө.
Ошо мәлдә икеһенең гонаһтары
Бармаҡтары араһынан ҡойолоп бөтөр.

112
Кейемең иҫкергән, туҙғандай,
Күңелдә иҫкерә иман да.
Иман нығ - доғалар ҡылғанда,
Иманды нығытып торғанда.

113
Күп кешеләр мәхрүм була
Ике байлыҡтан:
Сәләмәтлектән - һаулыҡтан
Вә буш ваҡыттан.

114
Кешеләрҙең иң яҡшыһы -
Оҙон ғүмер йәшәгәне,
Оҙон ғүмере буйынса
Тик яҡшы эш эшләгәне.

115
Һораны яугир:
- Эй, Рәсүл,
Ҡайны йыһат иң яҡшыһы?
Өҙөнгелә аяғым!
- Дин өсөн иң изге яу шул:
Ғәҙелһеҙ хаким алдында
Ғәҙел һүҙ әйтә алыу.

116
Уянғанда һәр көн әҙәм балалары,
Пар фәрештә икәүләшеп теләй теләк:
- Эй, Аллаһым, йомарттарға бир бәрәкәт!
- Эй, Аллаһым, һарандарға бир һәләкәт!

117
Мәсеттәре һәр урындың
Һөйөндөрөр Алланы,
Нәфрәтләндерер Раббыны
Баҙары һәр ҡаланың.

118
Иң беренсе булып кермә баҙарға,
Иң һуңғыһы булып сыҡма баҙарҙан.
Баҙарҙарҙа илде шайтан аҙҙыра,
Шунда мәлғүн үҙ байрағын ҡаҙаған.
Баҙарҙа бит үрсей иблес нәҫеле,
Шунда гонаһ аҙарғандан аҙара.

119
Фәрештәләр нурҙан яралған,
Ут-ялҡындан тыуған ен-пәрейҙәр.
Әҙәми зат ерҙән пәйҙә булған,
Китер ергә, тағы ҡалҡыр ерҙән.

120
Пәйғәмбәр әхлағы тигәндә -
Барыһы әйтелгән Ҡөрьәндә.

121
Күп һүҙ һөйләү сәбәп булыр
Аллаһтың асыуына.
Тел биҫтәһе телен болғай
Көйшәгән һыйыр һымаҡ.

(Дауамы бар).

✓ *Аллаһты иҫкә алып зикер әйтеү кешеләрҙең иң мөһим вазифаларының береһе һанала. Әгәр инсан рәхәт һәм тыныс көндәрендә Раббыһын иҫкә алһа, Аллаһ уға ауыр һәм михнәтле көндәрендә киң мәрхәмәтен күрһәтәсәк.*



*ИНТЕРНЕТТАН*



# ҒҮМЕР ОҘАЙЛЫҒЫН... гендар билдәләйме?

■ Ғаиләлә бала тыуғандан һуң йоҡо туймау, бала ҡарау менән бәйле эштәр әсәнең аҡыл һәләттәренә кире йоғонто яһай тигән ҡараш йәшәй. Әммә ғалимдар быны тап киреһен иҫбат итә: бала тапҡандан һуң ҡатын-ҡыҙҙың мейеһе үҫешә башлай икән. Яңы төр мәғлүмәттәр, яуаплылыҡтың артыуы һәм әсәлек инстинкты баш мейеһе күҙәнәктәренең үҫешенә килтерә. Америка психологик ассоциацияһы ғалимдары үткәргән тикшеренеүҙәрҙән күренеүенсә, бала тыуғандан һуң 3-4 ай үткәс тә баш мейеһенең ҡарарҙар ҡабул итеүгә, тойғолар өсөн яуап биреүгә яуаплы бүлектәренең күләме ярайһы уҡ ҙурая. Белгестәр әйтеүенсә, оло кешенең бындай ҡыҫҡа ваҡыт эсендә баш мейеһе үҙгәрә алмай. Тимәк, хәстәрлекле әсәйҙәр көндән-көн аҡыллана бара, ти улар.

■ Сәстәрҙең иртә салланыуында эш урынындағы стрестар һәм башҡа сәбәптәр генә түгел, ә төрлө диеталар һәм итле аҙыҡты аҙ ашау ғәйепле. Сәстең иртә салланыуының иң киң таралған сәбәбе - тирозин аҡһымының етешмәүе. Ул башлыса ит һәм майҙа осрай, шуға ла диетала ултырыусылар һәм ит ашамаусылар быға йышыраҡ дусар була. Тулы булмаған рационда тирозин һәм баҡыр етешмәй, ә тап улар буяусы пигменттар барлыҡҡа килеүенә яуап бирә.

■ Йәшел сәй радиациянан һаҡлай, тигән фекергә килгән Ҡытай ғалимдары. Улар үткәргән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, көнөнә ике сынаяҡ йәшел сәй эсеү, 1 әфлисун ашау компьютер экрандарынан таралған зарарлы нурҙарҙан һаҡлай. Йәшел сәйҙең япраҡтарында башҡа файҙалы элементтар менән бер рәттән, радиация тәьҫиренә ҡаршы торған матдәләр бар. Ә әфлисун яман шеште булдырмай, иммунитетты ла күтәрә.

■ Европа илдәрендә аҙыҡ-түлек һаҡлау өсөн ҡулланылған картон ҡаптарҙың ҙур ғына өлөшө иҫке ҡаптарҙы кире эшкәртеү һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килә. Швейцария ғалимдары белдереүенсә, бындай ҡаптар кеше сәләмәтлеге өсөн бик зарарлы. Тикшереү барышында асыҡланыуынса, ҡабаттан эшкәртелгән ҡапта һаҡланыусы аҙыҡ-түлектә минераль майҙар норманан 100 тапҡырға күберәк. Белгестәр әйтеүенсә, был эске ағзаларҙың ялҡынһыныуына, хатта онкологик ауырыуға килтерә.

■ Олатайығыҙ йәки өләсәйегеҙ 97 һәм унан да олораҡ йәштәме? Тимәк, һеҙ ҙә оҙаҡ йәшәйәсәкһегеҙ. Америка гериатрия йәмғиәте табиптары белдереүенсә, оҙаҡ йәшәүселәрҙең балаларында, ейән-ейәнсәрҙәрендә йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәре - 78, инсульттар - 83, шәкәр диабеты 86 процентҡа һирәгерәк осрай.

■ Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, көй тыңлау хәүеф тойғоһон һәм депрессияны кәметә, кәйефте яҡшырта һәм баш мейеһенең ҡайһы бер өлөштәрен уята. Әммә Америка ғалимдары билдәләүенсә, эш эшләгән ваҡытта яратҡан көйөңдө тыңлау эштең сифатына кире йоғонто яһай икән. Неврологтар көй һәм тауыштарҙың мейе функцияларына тәьҫирен тикшереп, тулы тынлыҡта ғына мейенең яҡшыраҡ эшләй алыуын асыҡлаған. Белгестәр әйтеүенсә, көй яңғырап торған саҡта мейе бер юлы бер нисә мәсьәлә башҡара һәм уның когнитив функцияларының һөҙөмтәлелеге кәмей.

*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*

# ФАТИХАЛЫ ҒАИЛӘ УСАҒЫ - Ерҙәге ожмах сағылышы ул



**Никах шул тиклем мөһим мәғәнәгә эйәме?**
**Никах - Бәйғәмбәрҙәребеҙҙең юлын ҡабатлау һәм Бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәттең (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) сөннәте, ир менән ҡатындың намыҫ ҡәлғәһе, кешенең башҡа йән эйәләренән өҫтөнлөгө.**

Никахта ике ир кеше шаһит булырға тейеш - улар эргә-тирәләгеләргә ир менән ҡатын араһында яңы союз барлыҡҡа килеүе тураһында хәбәр итә. Бөтә ниәттәр ҙә шаһиттарға мохтаж булмаһа ла, никахта улар мотлаҡ булырға тейеш. Никах булыуы тураһында эргә-тирәләгеләргә хәбәр итеү төп шарт булып тора, сөнки йәмғиәт был ир менән ҡатынды ғаилә иштәре тип ҡабул итергә тейеш. Юғиһә, никахланмаған йәш егеткә йәки ҡыҙға яңы тәҡдимдәр килеүе мөмкин. Ә рәсми рәүештә никахланған осраҡта бындай хәлдәр булмаясаҡ. Шулай итеп, туйҙар яңы ғаилә барлыҡҡа килеү шатлығы менән уртаҡлашыу өсөн генә түгел, шулай уҡ йәмғиәткә хәбәр итеү өсөн дә уҙғарыла.

Бер һүҙ менән әйткәндә, үҙенең бөтә үҙенсәлектәре менән никах Аллаһы Тәғәләнең ҡануны булып тора һәм кешенең өҫтөнлөгөн һәм уның абруйын һаҡлауға тәғәйенләнгән. Шулай итеп, Ислам дине буйынса, никах - ир менән ҡатын араһындағы союздың бөйөк нигеҙе. Ислам был нигеҙгә ҙур әһәмиәт бирә һәм никахһыҙ уҙғарылған башҡа союздарҙан баш тарта. Шуға күрә никахһыҙ булған мөнәсәбәттәр араһында иң ҙуры зина һанала, ул кешелек нәҫелен ҡоротторға һәләтле булған, әхлаҡҡа, матурлыҡҡа һәм ғаилә тормошоноң таҙалығына ҡаршы енәйәт һанала. Никах менән килгән бәхетте һәм тыныслыҡты тәртипһеҙ бәйләнештәргә алмаштырыу шул тиклем иҫәрлек булыр.

Һәр бер халыҡ үҙенең иманы һәм әхлағы менән көслө һәм уларҙың һағында никах тора икәнлеген онотторға ярамай. Шуға күрә Мөхәммәт бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) мосолмандарҙы хаталар ҡылыуҙан һаҡлап: "Иң яҡшы никах - ҡыйын булмағаны", - тип әйткән. Был никахты ҡайһы бер йолалар һәм хөрәфәттәр менән ҡатмарлаштырырға ярамай тигәнде аңлата.

Аллаһы Тәғәлә үҙенең ҡолдары тыныслыҡта һәм изге тәртиптә йәшәүен теләй. Никах - изге тәртиптәрҙең нигеҙе. Мосолмандарҙы Шәриғәт ҡанундары буйынса никахлаштырыу Ислам йәмғиәтенең изге бурысы булып тора. Изге китабыбыҙ Ҡөрьән-Кәримдә: "Буйҙаҡтарҙы, ҡолдарығыҙҙы, йәриәләрегеҙҙән (ҡатын ҡолдарығыҙҙан) булғандарҙы өйләндерегеҙ, кейәүгә бирегеҙ. Фәҡир булғандарҙы Аллаһ үҙ ниғмәттәре менән байытыр, иншаллаһ. Ниғмәттәре мул булған һәм бар нәмәне лә белеп тороусы - Аллаһ", - тип әйтелгән ("Ән-Нурр, 32).

Йәштәрҙе никахлашырға саҡырып, был эштә ярҙам итеүселәрҙең баһаһы тураһында бер ғалим: "Кешеләргә бәхетле ғаиләләр ҡорошорға ярҙам итеү - саҙаҡа-джарийа. Был ғаилә ағзалары эшләгән бөтә яҡшылыҡтар уға сауап булып яҙылыр", - тигән.

Беҙҙең ата-бабаларыбыҙ Әҙәм (ғәләйһиссәләм) менән Һауаның Аллаһы Тәғәлә ихтыяры менән ожмахта башланған һәм киләһе быуындарға бөтә ғаилә мөнәсәбәттәренең өлгөһө булараҡ күсә килгән ғаилә тормошо Ислам ҡанундары буйынса нығытылған була. Ислам ғаилә тормошона йәннәт ҡәнәғәтлеге һәм яҙғы күктең тыныслығын алып килә. Ә был хәлгә өлгәшеү өсөн, ата-бабаларыбыҙҙан өлгө алып, тулыһынса Аллаһы Тәғәләгә һөйөүгә һәм тәҡүәлеккә ҡойонорға кәрәк.

Ике таныш булмаған кешенең никах менән ғәжәйеп ҡушылыуында йәшерен белемдәр һәм нескә һабаҡ йәшеренгән. Аллаһы Тәғәләнең һөйөүе һәм рәхмәте менән нурландырылған ике йөрәк ҡушылыуы, ата-әсә йортонан килгәндәрҙең күңел йылыһы һәм бер-береңде аңлап йәшәүе... Аллаһы Тәғәләнең ниндәй изге күренеше! Тәрән уйланыуҙар өсөн ниндәй изге сәбәп!

Аллаһы Тәғәлә мосолмандарға никахты именлеккә юл булараҡ ебәргән, мәңгелек ожмахтың сағылышын Ҡөрьән һәм Мөхәммәт Бәйғәмбәрҙең (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) сөннәте буйынса ҡоролған ғаилә мөнәсәбәттәре ярҙамында ерҙә сағылдырған.

Кешеләргә лайыҡлы йәшәү рәүеше алып барырға мөмкинлек биргән Ислам дине, ҡатын-ҡыҙға мөһим роль биргән, уны кәмһетеү ҡотолғоһоҙ ауыр эҙемтәләргә алып киләсәк. Ҡатын-ҡыҙ ғаилә бәхетенең һәм именлегенең түренә эленгән гәлсәр шәм кеүек, эргә-тирәһен никах нуры һәм мәрхәмәте менән яҡтыртып тора, сафлығын һәм ғаилә намыҫын һаҡлай, гонаһлы ғәрәсәттәрҙән һәм тулҡындарҙан һаҡлаусы йәшен ҡайтарғыс булып хеҙмәт итә. Бының булмауы киләһе быуындарҙың тулыһынса юғалыуына килтереүе мөмкин, был үҙ сиратында туғандар бәйләнеше өҙөлөүгә сәбәп булып тора һәм һөҙөмтәлә йәмғиәт ҡоролошоноң емерелеүенә һәм фетнә тыуыуына алып килә. Нескә һәм наҙлы тойғолар юғала, хурлыҡ һәм тынысһыҙлыҡ барлыҡҡа килә. Былар бөтәһе лә - цивилизация байышының һәм бөтә донъя һәләкәте билдәһе.

Ҡөрьәндә әйтелгән: "Үҙегеҙҙән ҡатындарҙы яралтыу ҙа, ул ҡатындар менән (ләззәтләнеп) бергә йәшәүегеҙ ҙә, ир менән ҡатын араһындағы мөхәббәт һәм наҙ, бер-береңдең хаталарын кисерә белеү, һис шикһеҙ, Аллаһтың ҡөҙрәтенә асыҡ дәлилдәрҙер. Хаҡтыр, был эштәрҙә фекерләй белеүсе ҡәүемдәр өсөн ғибрәттәр бар".

Шулай итеп, ғаилә именлеге өсөн төп шарт булып ир менән ҡатындың бер-береһенә мөхәббәте, ышанысы һәм шәфҡәтлелеге тора.

**Усман Нури ТОПБАШ.**
**(Дауамы. Башы 12-се һанда).**

*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*

# ЗИКЕР ӘЙТЕҮ... иң сауаплы ғәмәлдер

**Ғаләмдәге бөтөн мәхлүкәт, тереклек эйәләре уның хужаһы Аллаһы Тәғәләгә үҙ теле менән зикер әйтә, тәсбих ҡыла. "Аллаһты тәсбих ҡылмаған һис нәмә юҡ, ләкин һеҙ уларҙың тәсбихтәрен аңлай алмаҫһығыҙ" ("Исра", 44).**

Әлбиттә, инсан да башҡа тереклек эйәләре кеүек үк, Раббыһына зикер әйтергә тейеш. Тормошобоҙҙоң бер миҙгелендә беҙ мохтаж булған нәмәләрҙе беҙгә икрам үә ихсан иткән, беҙҙе даими иҫкә төшөрөп тороусы һәм һис онотмаусы Аллаһты иҫкә алып зикер әйтеү кешеләрҙең иң мөһим вазифаларының береһе һанала. Әгәр инсан рәхәт һәм тыныс көндәрендә Раббыһын иҫкә алһа, Аллаһ уға ауыр һәм михнәтле көндәрендә хәтеренә төшөрәсәк, иғтибарһыҙ ҡалдырмаясаҡ, киң мәрхәмәтен күрһәтәсәк. "Мине иҫкә төшөрөгөҙ, мин дә һеҙҙе онотмаҫмын" ("Баҡара", 152).

Башҡа төр ғибәҙәттәрҙең билдәле бер ваҡыты бар. Ләкин зикер бер нәмә менән дә сикләнмәй. Уны һәр ерҙә, һәр ваҡыт әйтергә була. "Улар Аллаһты аяҡ өҫтөндә, ултырғанда, хатта ятҡанда ла зикер итәләр" ("Ғимран", 191). Аллаһтың Рәсүле (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм): "Кем дә кем бер ерҙә ултырып Аллаһҡа зикер әйтмәһә (үә һис зикер әйтмәйенсә тороп китһә), Аллаһтан уға бер кәмселек килер. Кем дә кем бер ерҙә ятып, унда Аллаһҡа зикер әйтмәһә, уға Аллаһтан бер кәмселек килер. Кем дә кем билдәле бер ваҡыт эсендә йөрөп торһа һәм ул ваҡытта Аллаһҡа зикер әйтмәһә, Аллаһтан уға бер кәмселек килер", - тигән.

Зикерҙе фәҡәт тел һәм һүҙ менән генә ҡылыу етмәй. Уның төрҙәре бар: тел ярҙамында ҡылынған зикер; ҡәлеб менән ҡылынған зикер, йәғни ҡәлебтең Аллаһҡа ҡараған мәғәнәләрен фекерләп, Уны "әсмәи хөснә" (яҡшы, матур исем) менән хис итеүе; тел һәм ҡәлеб берлектә ҡылған зикер; Аллаһтың әмеренә бойһоноу һәм тыйылырға ҡушҡан ғәмәлдәрҙән тыйылыу менән ҡылынған зикер.

Былар барыһы ла кешенең үҙ ихтыяры менән ҡылынған зикерҙәр. Ләкин организмыбыҙҙың һәр ағзаһы, хатта ағзаның кескенә бер күҙәнәге лә үҙе мохтаж нәмәләрҙе Аллаһы Тәғәләнән һорай, уға үҙ теле менән зикер әйтә. Тимәк, бәндә Аллаһҡа зикер әйтмәгән тәҡдирҙә лә, уның тәне даими рәүештә зикер әйтеү хәлендәлер.

Зикерһеҙ ғибәҙәт булмай. Ғибәҙәт зикер менән биҙәлә. Зикерҙең бөтөн төрҙәрен дә бергә туплаған иң ҙур ғибәҙәт - намаҙ. "Миңә зикер әйтеү өсөн намаҙ уҡы" ("Таһа", 14) тигән аят ошо хәҡиҡәтте белдерә.

ҠУЛ БЕЛГӘН ШӨҒӨЛ

# МИЛЛИ БАЙЛЫҒЫБЫҘ -

## Бөрйән бал ҡорто һәм солоҡсолоҡ

### Башҡорттоң был шөғөлөн ғәрәп сәйәхәтселәренең раҫлағаны

Бал ҡорттарының Көньяҡ Уралға кире әйләнеп ҡайтыуын һәм уларға кешенең һунар итә башлау осорҙарын аныҡ ҡына асыҡлап булмаҫ, ахыры. Ә бына солоҡсолоҡ менән шөғөлләнә башлау осорон күпкә аныҡ билдәләп була. Белеүебеҙсә, башҡа шөғөлдәр кеүек үк был кәсеп тә эш ҡорамалдары талап итә. Ысынлап та, был тарихи ҡомартҡылар һаҡланған. Археологик эҙләнеүҙәр быны тулыһынса иҫбатлай. Шул дәүер йәмғиәте кешеләре баҡыйлыҡҡа күскәндә уларҙың ҡәберенә эш ҡорамалдары ла һалып ҡалдырғандар. Беҙҙең осраҡта Бөрө ҡалаһы эргәһендә табылған ҡәберлек иң мөһим археолог ҡаҙылма булып иҫәпләнә. Бында солоҡсолоҡ кәсебенә ҡағылышлы бөтә эш ҡорамалдары табылған! Бына ошо тарихи ҡомартҡыларҙың йәшенә таянып, беҙҙең төбәктә солоҡсолоҡ менән беҙҙең эраның V-VI быуаттарында шөғөлләнә башлағандар, тип иҫбатлай тарихсы ғалимдар.

Һүҙ ыңғайы боронғо һәм хәҙер тотоноп йөрөгән эш ҡорамалдарының сифаты тураһында әйтеп китмәйенсә булмаҫтыр, ахыры. Улар бер-берећенән айырыла микән - бындай һорау күптәрҙе ҡыҙыҡһындыра. Ни тиһәң дә, кәм тигәндә лә бер мең биш йөҙ йылдан артыҡ ваҡыт үтеп киткән бит! Яуап үҙенсәлекле генә: табылған һәм бөгөн бөрйән солоҡсолары ҡулланған ҡорамалдар боронғо ата-бабаларҙыҡынан бөтөнләй айырылмай. Әгәр бик кәрәк икән, музейҙан боронғо бағауҙы ал да, һапла ла әйҙә сыҡ та кит солоҡ юнырға! Бындай төплө яуап мөһим һығымта яһарға мөмкинлек бирә. Солоҡсолоҡ кәсебе һәм уның ҡорамалдары шул заманда уҡ камиллыҡҡа етеп үҫешкән булған!

Дөйөм алғанда, беҙҙең төбәктәге ҡортсолоҡтағы 3 мөһим осорҙо асыҡлап үттек, буғай. Тәүгеһе - бал ҡорттары был төбәккә яҡынса 8 мең йыл элек кире әйләнеп ҡайтыуы бик ихтимал. Икенсеһе - сама менән кеше бал ҡорттарына осраҡлы рәүештә 2,5 мең элек һунар итә башлаған. Иң мөһиме - солоҡсолоҡ менән кеше 1,5 мең йыл элек, йәғни тимер быуат осоронда шөғөлләнә башлаған. Ә шулай ҙа был кәсеп менән кеше тимерҙе ныҡлап эшкәртергә өйрәнгәс кенә тотона башлаған, тигән фаразға өҫтөнлөк бирелә. Йомшаҡ булыу сәбәплеме, бәлки, башҡа сәбәптәндер, баҡырҙан эшләнгән ҡорамалдар ағас олонон соҡорға эшкинмәгәндер, тигән һығымтаға килә ғалимдар. Ә инде тимер эш ҡорамалдарының сифаты күпкә юғары. Улар күпкә үткер һәм ҡаты. Шуға күрә оҙаҡ йылдар хеҙмәт итә. Нисек кенә булмаһын, беҙҙең боронғо ата-бабалар бындай сетерекле эштәрҙе бик уңышлы башҡарып сығыуға өлгәшкән. Улай ғына түгел, хатта солоҡсолоҡ кәсебендә башҡаларға үрнәк булырлыҡ кимәлгә етә алғандар! Нисәмә быуаттар буйы тарих быны үҙе иҫбатлап килә.

Тарих тигәндәй, бына был тәңгәлдә беҙ ташҡа баҫылған сығанаҡтарға төплө таяна алабыҙ. Һүҙ ҙә юҡ, башҡорт солоҡсолоғона бәйле тарихи ҡомартҡыларҙың барыһы ла әһәмиәтле. Ә шулай ҙа бөгөн улар араһында иң мөһиме - ғәрәп Әхмәт ибн-Фаҙландың яҙмалары. Был эш тураһында ҡыҫҡаса ғына яҙып үтеп китәйек әле. Әллә яҙмыш, әллә осраҡлы хәл тигәндәй, Әхмәт ибн-Фаҙландың хеҙмәтен табырға һәм уның эшен тәржемә итергә башҡорт ғалимына насип була. Донъя кимәлендә танылыу тапҡан халҡыбыҙҙың бөйөк улы Әхмәтзәки Вәлиди Туғанды күҙ уңында тотам мин. Ул 1920 йылдарҙа Мешхедта (Иран) имам Али Ибн Реза кәшәнәһе янындағы китапханала мөһим табышҡа юлыға. Күренекле шәрҡиәтсе Зәки Вәлиди "Әхмәт ибн-Фаҙландың 921-922 йылдарҙа Волга буйына сәйәхәте" тип аталған яҙмаларын табып ала. Ысынлап та, тарихи күҙлектән сығып ҡарағанда ғәрәп ғалимы һәм сәйәхәтсеһенең был хеҙмәте ҙур әһәмиәткә эйә булып сыға. Быны тулыһынса аңлау өсөн ошоно әйтеү ҙә етәлер: бөгөн Әхмәт ибн-Фаҙландың был хеҙмәте башҡорттар тураһында мәғлүмәт һаҡлаусы иң боронғо сығанаҡ булып иҫәпләнә. Ғөмүмән алғанда, тарихта башҡорт исеме тәү тапҡыр тап ошо әҫәрҙә алына.

Х быуаттағы тарихи ваҡиғаларға ҡағылышлы был хеҙмәттең баһаһы үтә юғары. Уның яҙылыу тарихы ла үҙенсәлекле. 921-922 йылдарҙа Бағдад хәлифе Әл-Муҡтадир үҙҙәренең һорауы буйынса Иҙел-Болғар иленә илселәрен ебәрә. Илселектең төп маҡсаты сәйәси яҡтан бик мөһим була. Хазарҙар баҫымынан ҡотолоу маҡсатында Иҙел-Болғар иле халиф Әл-Муҡтадир ярҙамына иҫәп тота. Үҙ сиратында, был ярҙамға яуап итеп, улар ислам динен ҡабул итергә ризалығын белдерә. Бына ошондай маҡсат менән хәүефле юлға сығып китә хәлиф кешеләре. Ғалимдар раҫлауынса, ошо илселектә төп эш хәлифәт сәркәтибе Әхмәт ибн Фаҙлан елкәһенә төшә. Уға барлыҡ мөһим эштәрҙе башҡарырға тура килә: хөрмәтле башлыҡтарға зиннәтле бүләктәр тапшырыу, хәлифтең хатын уҡып ишеттереү, ислам динен дөрөҫ аңлатыу, уны таратыу буйынса эш алып барыу... Бынан тыш хәлифәт сәркәтибе тағы бер үтә мөһим эш башҡарырға ла ваҡыт таба. Ул Бағдадтан сығып киткәндән алып кире әйләнеп ҡайтҡансы күргәндәрен-белгәндәрен-һорашҡандарын бик ентекле теркәп бара! Тап бына ошо яҙмалар "Әхмәт ибн-Фаҙландың 921-922 йылдарҙа Волга буйына сәйәхәте" тип атала ла инде. Әммә шуныһы бер аҙ күңелде ҡырғандай. Ғәрәп илселегенең Иҙел-Болғар илендә башҡарған эштәренең һөҙөмтәһе бөгөн мәғлүм түгел. Ни сәбәп менәндер инде, был яҙмаларҙың аҙаҡҡы биттәре юғалған булып сыға. Хатта нисә бит етмәгәне лә билдәһеҙ.

Шулай ҙа сәйәхәтселәргә әйләнеп ҡайтайыҡ әле. Ә уларға, үкенескә ҡаршы, тарихи башҡорт ерҙәренең уртаһынан үтергә насип булмай. Сәбәбе - был сәйәхәттең үтә хәүефле



икәне уларға алдан билдәле була. Тарихсы ғалимдарҙың эшенә таянып, ошондай миҫал килтереү урынлы булыр. Ғуҙҙар илендә сәйәхәтселәрҙе икеләнеп-шикләнеп һалҡын ғына ҡаршы алалар. Шулай ҙа хәлиф Әл-Муҡтадир ебәргән ҡиммәтле бүләктәрҙе ихлас ҡабул итәләр, әммә ислам динен ҡабул итеү тәҡдименә ыңғай яуап бирмәйҙәр. Кәңәшмә ваҡытында, был ғәрәп сәйәхәтселәрен үлтереп ташларға, тигән тәҡдим дә яһап ҡуя хатта хәрби башлыҡ. Төплө фекергә килә алмаған ғуҙҙар, ахырҙа, ғәрәп илселегенә юлдарын дауам итергә рөхсәт бирәләр. Хәлифтең мөрәжәғәте лә асыҡ һауала эленеп ҡала. Әлегә беҙ кәңәшләшә торабыҙ, ә яуапты кире ҡайтҡан сағығыҙҙа бирербеҙ, тип уларҙы оҙатып ҡалалар. Ҡайҙа инде бындай осраҡта яуап таптырып көсләшеп тороу. Сәйәхәтселәргә тере ҡалғандарына шөкөр итеп юлдарын дауам итергә генә ҡала.

Тарихсылыр иҫбатлауынса, ғәрәп илселәре башҡорттарҙың кире мөнәсәбәтен алдан белгән була. Заманында быға төплө нигеҙ ҙә булғандыр инде. Шуға күрә сәйәхәтселәр башҡорт ерҙәренә мөмкин тиклем инергә тырышмай. Әммә был ерҙәрҙе бөтөнләй урап үтеү мөмкинлеге лә булмағандыр, күрәһең. Шуға ла ғәрәп сәйәхәтселәре башҡорттар йәшәгән төбәктең ситенән үтеп китәләр. Тарихи башҡорт ерҙәренең көньяҡ-көнбайыш өлөшөнә тура килә был юл. Әммә шулай ҙа хәлифәт сәркәтибенә рәхмәт әйтеп китеү бик урынлы булыр. Тарихи башҡорт ерҙәренең ситенән үтеп китһәләр ҙә Әхмәт ибн Фаҙлан дөйөм тарихта тәү тапҡыр боронғо ҡәрҙәштәребеҙ тураһында бик мөһим этнографик мәғлүмәттәр туплауға өлгәшкән. Бәлки, шул ваҡытта ошо ғәрәп киләсәк быуын өсөн ниндәй бүләк ҡалдырыуы тураһында төшөнөп тә етмәгәндер. Әммә бөгөн был тарихи ҡомартҡының әһәмиәте баһалап бөткөһөҙ икәне бәхәсһеҙ.

Был тарихи сығанаҡта бал ҡортона ҡағылышлы урындары юҡ микән, тип һорар бәғзе уҡыусы. Беҙҙең бәхеткә микән, бар ундай юлдар яҙмаларҙа. Сәркәтип Ибн-Фаҙлан башҡорт халҡының боронғо кәсебе тураһында айырым яҙып китә. Эҙмәэҙлекле тәржемәһе ошолай килеп сыға: "Уларҙың (башҡорттарҙың - автор) урманында бал күп ҡорт ояларында, уларҙы улар яҡшы beләләр һәм улар унан барып бал йыялар".

Ошо тарихи юлдар беҙҙе сал быуаттар төпкөлөнә алып төшөп киткәндәй була. Унан солоҡсолоҡ шөғөлөнә күҙ һалһаҡ, халҡыбыҙҙың был боронғо кәсебе, минеңсә, күпкә сағыуыраҡ, күпкә мөһимерәк, күпкә ҡәҙерлерәк күренгән төҫлө.

**Әғләм ШӘРИПОВ.**
**Бөрйән районы.**

**(Дауамы. Башы 7-8, 11-се һандарҙа.)**

УҢЫШ ҠАҘАН



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Стрестың ыңғай яғы

Борон кеше һунарсылыҡ менән ғүмер иткәндә уға йыртҡыс хайуандар менән даими осрашырға тура килгән. Уның тәне шунда уҡ реакция күрһәткән - йөрәге йышыраҡ тибә башлаған, һулышы йышайған, ашҡаҙан һутының әселеге артҡан, был үҙ сиратында һуғышырға йәки ҡасырға кәрәкле биҙҙәрҙең эшмәкәрлеген көсәйткән. Был стресс реакцияһы уның ғүмерен һаҡлап ҡалған.

Бөгөн дә стресс ҡайһы бер осраҡта, мәҫәлән, үҙебеҙҙең һәләтебеҙҙе һәм оҫталығыбыҙҙы бөтә тулылығында күрһәтергә, тиҙ уйларға һәм эшләргә, аудитория алдында сығыш яһарға, спортсыларға еңеү өсөн бөтә көсөн һалырға ярҙам итә. Әммә ашҡаҙанда әселек артҡанда, уны кәрәкле йүнәлешкә ебәрмәһәң, ул ашҡаҙан сей яраһына һәм башҡа ауырыуҙарға килтереүе мөмкин.

**Нисек итеп стресҡа бирешмәҫкә?**

Һеҙ стресҡа ҡаршы тәүге "сирҡаныу" алдығыҙ. Ыңғай фекер йөрөткәндә һәм стресс хәлендә башҡа кешеләргә йыуаныс булып хеҙмәт итәһегеҙ икән, һеҙ стрестың йоғонтоһон кәметәһегеҙ. Күҙҙәрегеҙҙе йомоп, өс тапҡыр тәрән итеп тын алып, тыныс картиналарҙы күҙ алдығыҙға килтереп, стрестың ҡаяуын йолҡоп алаһығыҙ. Ике бармағығыҙҙы бергә тоташтырып, стресҡа ҡаршы иң бөйөк дарыу - Ижадсы менән бәйләнеште нығытаһығыҙ. Үҙегеҙгә ыңғай маҡсат ҡуйып, һеҙ стресты ҡоралһыҙландыраһығыҙ. Хатта уңайлы итеп ултырыу, күҙҙәрегеҙҙе йомоп өс тапҡыр тәрән итеп тын алыу мөмкинлеге булмағанда ла үҙегеҙҙе һаҡлаусы уйҙағы ҡуйылышҡа мөрәжәғәт итергә була. Бына шундай бер нисә күнекмә:

**Был да үтер.**
**Булһа ни булған?**
**Аллаһ мине ҡалдырмаҫ.**
**Нимә генә эшләнмәһен - барыһы ла яҡшыға.**
**Эштәр яҡшырғандан яҡшыра бара.**
**Был һоҡланғыс көн буласаҡ.**

Ә бына түбәндәге симптомдар аша тәнебеҙ стрестың уларға етди һөжүм яһай башлауын белгертә: ашҡаҙанда насар тойғолар; йышайған пульс; йоҡоһоҙлоҡ; даими арыу; тырнаҡтарынды сәйнәү теләге; ҡыҙыусанлыҡ; хәтер насарайыуы; бер нәмәгә иғтибар туплай алмау; шәрбәтле аҙыҡҡа тартылыу; алкоголде саманан артыҡ ҡулланыу. Әгәр һеҙ бизнес менән шөғөлләнһәгеҙ, тағы бер пункт өҫтәгеҙ - үҙ бурыстарынҙан ситкә тартылыу. Быны бер һүҙ менән атағанда - йонсоу.

Ә көндәлек тормошта стрестың эҙемтәләрен йомшартыу өсөн нимә эшләргә? Юмор хисен һаҡлап ҡалығыҙ; яңғыҙ ҡалып көсөргәнештән арынығыҙ; физик күнегеүҙәргә өҫтөнлөк бирегеҙ; йәйәү йөрөгөҙ; массаж эшләтегеҙ; яңы әйбер һатып алығыҙ; күңелле спектаклгә йәки киноға барығыҙ; алкоголь һәм кофеин ҡулланыуҙы кәметегеҙ; үҙ бурыстарығыҙҙы кемгәлер тапшырығыҙ; етәксегеҙ алдында ҡаушап ҡалмағыҙ; ахыр сиктә, эшегеҙҙән китегеҙ.

Тәүге "тиҙ ярҙам" саралары шундай. Иң мөһим һаҡланыу сараһы булып көсөргәнештән арыныу тора. Бындай торошҡа инеп, ниндәйҙер тәбиғәт ҡосағында булған сағығыҙҙы күҙ алдына килтерегеҙ - диңгеҙ яры, ялан, тау башы, күл буйы, йылға. Был картинала ике йәки өс тапҡыр туҡталығыҙ.

**Роберт СТОУН.**



## 28 МАРТА
## ПОНЕДЕЛЬНИК
## ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "ЖКХ"
11.45 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Жди меня"
21.00 "Время"
21.30 "Возмездие", 9-я серия. Сериал
22.30 "Свидетели"
23.30 "Ночные новости"
23.50 "Следствие по телу", 6-я серия. Сериал
00.40 "Дежурный папа"
02.30, 03.05 "Джо и Макс"
03.00 Новости

## РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Безответная любовь. Римма Казакова"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "С новым домом!"
12.50 "Каменская". Сериал
13.45 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Ефросинья. Продолжение", 21-я серия
17.55 "Все к лучшему", 48-я серия
18.55 "Институт благородных девиц", 119-я серия
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Всегда говори "Всегда"-7", 1-я, 2-я и 3-я серии
23.50 "Вести+"
00.10 "Человек, который молчал". Триллер
01.45 "Мы, нижеподписавшиеся". Социальная драма
04.45 "Вести. Дежурная часть"

## НТВ
04.55 "НТВ утром"
08.30 "Следствие вели..."
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.25 "Прокурорская проверка"
14.40 "Давайте мириться!"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Улицы разбитых фонарей". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Мент в законе-4", 1-4-я серии
23.15 "Сегодня"
23.35 "Честный понедельник"
00.25 "Школа злословия"
01.10 "В зоне особого риска"
01.45 "Правило лабиринта"
04.05 "Ты не поверишь!"

## БСТ
**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на башк. яз.)**
**09.15 "Полезные новости"**
**09.45 "Неслучайные люди"**
**10.00 "Забытые войны"**
**10.30 "Специальный репортаж"**
**10.45 "Учим башкирский язык"**
**11.00 "Гора новостей"**
**11.15 "Городок АЮЯ"**
**11.30 "Приключения мастера кун-фу"**
**12.00 Новости (на русск. яз.)**
**12.15, 19.00, 23.15 "Замандаштар"**
**12.30, 20.30, 23.30 "Орнамент"**
**12.45 "Надо знать!"**
**13.00 "Весы"**
**14.00 "Широка река"**
**15.00 Новости (на башк. яз.)**
**15.15 "Тамыр". "Гора новостей" и другие**
**16.15 "Аргамак"**
**17.15 "Тэмле"**
**17.45 "Полезные новости"**
**18.00 Новости (на русск. яз.)**
**18.15 "Специальный репортаж"**
**18.30 Новости (на башк. яз.)**
**19.15 "Пора разобраться"**
**20.00 "Учим башкирский язык"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.45 "Надо знать!"**
**21.00 "Неслучайные люди"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "На самом деле"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.00 "Специальный репортаж"**
**23.45 Худ. фильм**
**01.00 "Прогноз погоды"**

## 29 МАРТА
## ВТОРНИК
## ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "ЖКХ"
11.45 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы". Сериал
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Возмездие", 10-я серия
22.30 "Управление сном"
23.30 "Ночные новости"
23.50 "На ночь глядя"
00.40 "Дежурный папа: летний лагерь"
02.30, 03.05 "Зазубренное лезвие"
03.00 Новости

## РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Ауаз"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "С новым домом!"
12.50 "Каменская". Сериал
13.45 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Ефросинья. Продолжение", 22-я серия
17.55 "Все к лучшему", 49-я серия
18.55 "Институт благородных девиц", 120-я серия
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Всегда говори "Всегда-7", 4-я, 5-я и 6-я серии
23.50 "Вести+"
00.10 "Дублеры". Комедия
02.30 "Горячая десятка"
03.40 "Закон и порядок"
04.45 "Вести. Дежурная часть"

## НТВ
04.55 "НТВ утром"
08.30 "Очная ставка"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Чистосердечное признание"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.25 "Прокурорская проверка"
14.40 "Давайте мириться!"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Улицы разбитых фонарей". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Мент в законе-4", 5-8-я серии
23.15 "Сегодня"
23.35 "Терминал", 13-я и 14-я серии
01.25 "Главная дорога"
01.55 "Кулинарный поединок"
02.55 "Правило лабиринта", 11-я и 12-я серии

## БСТ
**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на башк. яз.)**
**09.15 "Полезные новости"**
**09.45 "Неслучайные люди"**
**10.00 "Пора разобраться"**
**10.45 "Учим башкирский язык"**
**11.00 "Гора новостей"**
**11.15 "Царь горы"**
**11.30 "Приключения мастера кун-фу"**
**12.00 Новости (на русск. яз.)**
**12.15, 19.00, 23.15 "Замандаштар"**
**12.30, 20.30, 23.30 "Орнамент"**
**12.45 "Надо знать!"**
**13.00 "Весы"**
**14.00 "Широка река"**
**15.00 Новости (на башк. яз.)**
**15.15 "Тамыр". "Гора новостей" и другие**
**16.15 Концерт. Альфия Каримова. Национальный симфонический оркестр РБ**
**18.00 Новости (на русск. яз.)**
**18.15 "Криминальный спектр"**
**18.30 Новости (на башк. яз.)**
**19.45 "Полезные новости"**
